ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 февраль (шаҡай) 2015 №8 (634)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ һАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Үлемһеҙ полк...**



Өфө урамдары буйлап үтәсәк 4

**Әҙип дәресе**



5

**Ситтә чемпионлыҡ яулаһаң да...**

тыуған ерҙә үҙең булып йәшә



8-9

**"Әсә" фильмы...**

тамашасыларын көтә



16

**ТВ-программа 14**

***Асыулы, ҡараңғы йөҙлө бер әҙәм йәмәғәт транспортында китеп бара һәм уйлай: "Тормошта бер йүнле нәмә юҡ, барыһы ла эс бошорғос. Етәксем - яуыздың яуызы, ҡатыным - мыжыҡ, балалар тәртипһеҙ..." Ә яурынында ултырған фәрештә дәфтәренә уның һүҙҙәрен сыйғыслай:"...барыһы ла эс бошорғос. Ҡатыным - мыжыҡ, балалар тәртипһеҙ, етәксем - яуыздың яуызы... Һуң был һүҙҙәрен ул кисә лә, унан алда ла яҙҙырғайны бит... Ниңә кәрәк икән уға былар? Ярай инде, үҙе шулай теләгәс, үтәргә тура килә..."***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Ир-егеттән азаматлыҡ китһә,*
## *Азатлығы бөтә, халҡы бөтә.*
## *Халҡы бөткән ирҙең "ир-егет" тип*
## *Аталырға мәгәр хаҡы бөтә...*



***Зиннур СИРАЗИТДИНОВ, филология фәндәре кандидаты, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәре:***
Ир-егет азаматлығын заманыңдың лайыҡлы улы булып, ошо заман өлөшөнә төшкән һынауҙарҙы үҙ иңеңдә күтәрешеп, һәр аҙымыңда яуаплылыҡ тойоп, ата-бабаларыбыҙ ҡушҡанса, донъяға ҡарашыңды киңәйтеп, белемеңде камиллаштырып, бына тигәнсә донъя ҡороп, балалар үҫтереп, айыҡ аҡыл, аныҡ маҡсаттар ҡуйып йәшәү тип аңлайым мин. Һәр заманда ла ир-егеткә йәшәүе еңелдән булмаған. Беҙҙең дә заманыбыҙға күрә үҙ проблемаларыбыҙ етерлек. Донъя йөгө ир-егет елкәһендә: мал табыусы ла, ғаиләһен аҫыраусы ла ул, ләкин заманыбыҙ ошо хәҡиҡәткә үҙ төҙәтмәләрен индереп тора. Эшһеҙ тороп ҡалған егеттәребеҙ ауыр кисерә бындай кәмһенеүле хәлде. Уның ҡарауы, ҡатын-ҡыҙ мал, аҡса табырға өйрәнеп алды хәҙер. Был да намыҫына тейәлер уларҙың. Ләкин ирмен, тигән ир-егет төшөнкөлөккә бирелеп, ҡатыны ҡулына ҡарап өйҙә ултырырмы! Ир аҫылы, уның азаматлығы яуҙарҙа ғына һыналмай бит, ә бына әлегеләй тормош һикәлтәләрендә лә бик асыҡ күренә. Донъя йөгөнән бөгөлгән, эскегә бирелгән кешене, бик ҡыҙғаныс хәлгә төшһә лә, йәлләге килмәй бер ҙә, киреһенсә, асыу килә. Ундай ғына һынауҙар үтмәгәнме ата-бабаларыбыҙ? Ҡул-аяғы имен, башы-күҙе теүәл кешегә эш бөтмәгән. Эйе, Себергә лә китәләр, ни хәл итһендәр? Ләкин уларҙы ла йәлләргә, ирләргә кәрәкмәй - ғаиләмде аҫырайым, балаларымды аяҡҡа баҫтырам, тип йөрөй бит улар. Эш - ҡайҙа ла эш инде, илдә шундай хәл тыуғас, унан сығыу әмәлен күрергә тура килә ир- азаматтарға. Шуға Себер китеүселәрҙе лә ир-азаматтар тип әйтеү яҙыҡ булмаҫтыр. Ләкин балалар үҫтереү - уларҙың буйын үҫтереү генә түгел шул, ә халҡыбыҙҙың лайыҡлы ул-ҡыҙҙары итеп тәрбиәләү икәнен онотторға ярамай. Беҙ, мәҫәлән, ҡатыным Венера менән 4 бала үҫтерәбеҙ. Өлкән улыбыҙ Билал вуз бөтөрҙө, математик, программалаусы инженер. Ҡыҙыбыҙ Ләйсән табип һөнәренә уҡый, ә игеҙәктәребеҙ Аҫҡар менән Камилә башҡорт лицейында белем ала. Балаларыбыҙҙың туған телен онотмаясағына иманым камил, сөнки уға нигеҙ телдәре асылыу менән һалына башланы. Өлкән улым менән туған тел сайтын эшләнек, терминологик базаны тулыландырҙыҡ. Башҡорт мәктәбендә уҡыу, өйҙә башҡортса аралашыу, Аҡмулла, Бабич, Рәми шиғырҙарын яттан һөйләү туған телгә ихтирам уятып ҡына ҡалмай, уның менән ғорурланып йәшәү өсөн дә сығанаҡ. Шәжәрә тамырҙары ла беҙҙе илебеҙ, халҡыбыҙ, телебеҙ мөхитенә мәңгелеккә бәйләүсе ептәр. Атайым, Әмир Мәхәмәдиә улы, заманында әлеге Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡый, ауыл хужалығы институтын тамамлай. Башҡа зыялы ағайҙар менән бергә Өфөлә 20-се башҡорт мәктәбен асыуға күп тырышлыҡ һала. Атайымдың атаһы ла заманының уҡымышлыһы булған: Үтәк мәҙрәсәһендә Зәки Вәлиди менән бер осорҙа белем алған. Улар аманатын дауам итеп, килер быуындарыбыҙҙы илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр итеп тәрбиәләй алһаҡ, шул булыр ине, тием, халҡыбыҙ алдында азаматлыҡ өлгөһө.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ




## ИР-ЕГЕТ

*Бейек тауҙың үлгәне -*
*Башын монар алғаны.*
*Ҡара ерҙең үлгәне -*
*Ҡар аҫтында ҡалғаны.*
*Ағын һыуҙың үлгәне -*
*Боҙ аҫтында ҡалғаны.*
*Ир-егеттең үлгәне -*
*Илен дошман алғаны.*
*Бейек тауҙың тереһе -*
*Күгәреп тә ятҡаны.*
*Ҡара ерҙең тереһе -*
*Йәшәреп тә киткәне.*
*Ағын һыуҙың тереһе -*
*Сафланып та аҡҡаны.*
*Ир-егеттең тереһе -*
*Ат атланып сапҡаны.*
*Бейек тауҙың йәне бар,*
*Түбәһендә таш барҙа.*
*Ҡара ерҙең йәндәре -*
*Яуып үткән ямғырҙа.*
*Ағын һыуҙың йәндәре -*
*Теш ҡамашыр һалҡында.*
*Ир-егеттең йәндәре -*
*Йәндәй күргән халҡында.*

### ИҒТИБАР!

Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 февралдән 31 мартҡа тиклем быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Ташламалы хаҡ 513 һум 72 тин тин тәшкил итә. Апрелдә хаҡтарҙың артыу ихтималлығын күҙҙә тотоп, гәзитебеҙгә әле үк яҙылып ҡуйырға кәңәш итәбеҙ.

Тағы бер хәбәребеҙ шул: 26 февралдән 7 мартҡа тиклем матбуғатҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. **Ошо ун көнлөктә “Киске Өфө”гә 445 һум 56 тингә, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарына 398 һум 40 тингә (махсус индекс - Д0665) яҙылырға мөмкин буласаҡ.** Башҡортостандың бөтә почта бүлексәләрендә лә ун көнлөктөң махсус шарттары менән таныша йәки баҫмаларға яҙыла алаһығыҙ.

Ир-егеттәргә шундай тәкдимебеҙ бар: 8 Март байрамына әсәйҙәрегеҙгә, апайһеңлеләрегеҙгә, ҡатындарығыҙға "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып бүләк итегеҙ. Улар өйҙәренә гәзит килгән һайын һеҙҙе иҫкә төшөрөр, рәхмәт уҡыр. Ошондай матур бүләктән мәхрүм итмәгеҙ яҡындарығыҙҙы.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урыныҡ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ӘХЛАҠИ КӨРСӨКТӘН ҺАҠ БУЛАЙЫҠ!

**Мәжит МӘХМҮТОВ, математика фәндәре докторы, профессор:** Илебеҙҙә бер осорҙа ла тыныс ҡына йәшәп булмағандыр ул, әле лә бына иҡтисади көрсөктән ҡурҡып торабыҙ. Әммә шул иҡтисади көрсөктән дә яманыраҡ, ҡурҡынысыраҡ замана афәте - әхлаҡи көрсөк янауына иғтибар итмәйбеҙ. Аҡса етмәһә лә, баҙарҙа хаҡтар күтәрелһә лә, милләттәштәр бирешмәҫ, сараһын табып йәшәү әмәлен күрер. Һаҡлауҙа әллә ниндәй ҙур суммалы аҡсабыҙ ҙа юҡ, уны юғалтыуҙан ҡурҡырға түгел. Ә бына үҫеп килгән йәш быуындың әхлаҡи көрсөккә килеп терәлеүен тыныс күҙәтергә ярамай. Бөгөн беҙ балаларға тейешле иғтибар бүлеп еткермәйбеҙ, уларҙың тәрбиәһе, тәртибе менән шөғөлләнмәйбеҙ, ваҡыттарын нисек үткәреүе менән дә йыш ҡыҙыҡһынмайбыҙ. Тәрбиә эштәре менән ата-әсәләр, балалар баҡсаһы, мәктәп шөғөлләнергә тейеш, тип, бурыстарҙы бүлеп, бер-береһенә яңһарып ҡуйыусылар ҙа юҡ түгел. Бер яҡтан, ата-әсәләрҙе лә аңларға мөмкин, ғаиләнен ҡарайым тигән кеше күп осраҡта эштән ҡайтып инмәй, Себергә аҡса артынан китеүселәр күп.

Тормош мәшәҡәттәре күп булһа ла, ата-әсәләр балаларҙы йышыраҡ үҙ эргәһендә йөрөтөп, эшкә, тәртипкә өйрәтергә тырышһын ине. Беҙ бала саҡта көпә-көндөҙ ҡул ҡаушырып телевизор ҡарап ултырыу оят була торғайны, малайҙар һәр ваҡыт аталары эргәһендә, ҡыҙҙар әсәләренә ярҙамлашып йөрөр ине. Кискеһен, бөтә эштәр тамамланғас ҡына, ял минуттарында күмәкләп, ғаилә менән ултырып, берәй фильм, тапшырыу ҡарайһың. Әйткәндәй, мәктәпкә барғас та буш ваҡыт булманы, башта октябрят, һуңынан пионер, комсомол ойошмаларына йөрөнөк, мәктәп уҡыусылары өсөн төрлө түңәрәктәр эшләй, экскурсиялар ойошторола, тимурсылар командалары була торғайны. Хәҙерге йәштәр тотош үҙ иркенә ҡуйылған, үҙ юлын һәр кем үҙе һайлай, тибеҙ, ләкин уларға һәләтен асырға, үҙен аңларға, һөнәр һайларға йүнәлеш бирерлек түңәрәктәр һирәк. Ҡайһы бер сығарылыш уҡыусылары ниндәй һөнәр эйәһе булырын белмәй, баҙап ҡалыуын мин ҡыҙыҡлы экскурсиялар ойошторолмауында күрәм. Беҙҙе төрлө юғары уҡыу йорттарына, музейҙарға, алдынғы производство үҙәктәренә йөрөттөләр. Әйткәндәй, минә буласаҡ һөнәремде һайларға ошондай сираттағы экскурсия ярҙам итте, Башҡорт дәүләт университетына "Урал" ЭВМ-ын ҡарарға барып, ҡыҙыҡһынып ҡайттым. Ғөмүмән, киләсәген уйлаған, илдең үҫешен теләгән, ниндәйҙер файҙалы эш башҡарырға хыялланған кеше ҡуллаңыусы кимәлендә фекер йөрөтөүҙән арыныға тейеш.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ир-егеттән азаматлыҡ китһә, Азатлығы бөтә, халҡы бөтә. Халҡы бөткән ирҙең "ир-егет" тип Аталырға мәгәр хаҡы бөтә...



(Башы 1-се биттә).

***Азамат ТАЖЕТДИНОВ, БР Халыҡ мәғарифы отличнигы, яҙыусы, журналист, тыуған яҡты өйрәнеусе-тарихсы:*** Беренсенән, ил азаматы булыу - ул илең, халҡың яҙмышы менән йәшәү: уҡып сығып, һөнәргә эйә булыу, тормошоңдо ҡороп, үҙ миҫалыңда илһөйәр балалар тәрбиәләү, халҡың тарихын яҡшы белеү, уны өйрәнеү, әсә телеңде ҡәҙерләү - ҡыҫҡаһы, заманыңдың лайыҡлы уҙаманы булыу тип аңлайым һеҙ ҡуйған мәсьәләне. Ғүмерем буйы ошо инаныуҙарыма тоғро булып йәшәргә тырыштым. Оҙаҡ йылдар мәктәптә уҡытып, хаҡлы ялға сыҡҡас, тыуған ағымды, ауылдар тарихын, ундағы күренекле яҡташтарымдың тормош юлын өйрәнеп, бик күп материалдар тупланым һәм улар буйынса 10 китап яҙып, баҫтырып сығарҙым. Үҙмаҡсаттан түгел, ә яҡташтарым, шулай уҡ йәш быуын вәкилдәре өсөн. Ә бит ниндәйен дә ир азаматтары йәшәгән беҙҙең төбәктә! Легенда итеп һөйләр ине улар хаҡында ауыл аҡһаҡалдары. Мәҫәлән, Шәһәргәзе сәсән үҙе генә ни тора! "Киске Өфө"лә был турала мәҡәлә баҫылғаны булды. Дүрт һуғышта ҡатнашҡан: Беренсе донъя һәм граждандар һуғыштарында, финдарға һәм немец фашистарына ҡаршы батырҙарса алыша ул. Әйткәндәй, репрессия йылдарында "халыҡ дошманы" мөһөрө һуғылып, 10 йыл төрмәлә ултыра, Сталин исемендәге Беломорканалды төҙөүҙә ҡатнаша. Бөйөк Ватан һуғышынан иҫән ҡайтырға насип була уға. Вафаты алдынан минә архивын ҡалдырҙы. Яҙмалары ғәрәп хәрефтәре менән яҙылғанға күрә, иҫке төркиҙе өйрәнеп, ғалимдар ярҙамында баҫтырып сығарҙым ҡулъяҙмаларын. Баймаҡ районы сәсәндәре хаҡында "Ел-дауылдар аша" тигән китабым да сыҡты. Бына, исмаһам, йәшәгән ил ағалары - ысын азамат ирҙәр! Яҡташтарым бай тарихлы кесе ватаныбыҙ тураһында белеп, уның менән ғорурланып йәшәһендәр, тигән маҡсаттан сығып яҙыша башланым да инде. Югиһә, күптәр хатта үҙе йәшәп ятҡан ауылының да тарихын белмәй, шуныһы бигерәк үкенесле. Ундай ир-егетте нисек итеп уҙаман, азамат тип ҙурламаҡ кәрәк! Былдай битарафлыҡ шуныһы менән дә хәүефле: уның бит балаларына ла биреләүе ихтимал... Ә бала күңеленә дөрөҫ йәшәү өлгөһө ғаиләлә һалына. Шөкөр, балаларыбыҙ өсөн дә ҡыҙарырға тура килмәй: бөтәһе лә башлы-күҙле, аңлы-ғилемле, уйлы-һөнәрле булып, республикабыҙ мәнфәғәтенә хеҙмәт итәләр.

***Мәхмүзә ИСЛАМҒОЛОВА, Баймаҡ районы Ярат ауылының "Әғинәйҙәр" ҡоро ағзаһы:*** Бөгөнгө тормошобоҙҙа нилектәндер азаматлыҡ өлгөһөнә урын ҡалмай башланы һымаҡ. Улай тиһәң, азамат ир-егет булып йәшәр өсөн мотлаҡ тау аҡтарыу, баҫҡынсыны илдән һөрөү кеүек ҡаһарман ғәмәлдәр ҙә кәрәк түгел. Тыныс, көндәлек йәшәйешебеҙҙә лә азаматлыҡҡа урын күп бит, тик ана шуны йәшәү өлгөһө итеп алырға кәрәктер, тием. Үҙебеҙҙең ауыл биләмәһенән мин, мәҫәлән, Ҡадир Ишҡыуатов тигән егетебеҙҙе тап ана шундай азаматтар иҫәбенә индерер инем: ауылым, ауылдаштарым, тип янып йәшәй. Үҙ эшен аҫҡан, ләкин үҙ көнөн генә күрергә тырышып ятмай ул. Таҡта бысыу цехы тота. Ауылдаштарына, ауыл хакимиәтенә төҙөкләндереү эштәрендә, шулай уҡ мәсет төҙөргә ағас материалдар менән ярҙам итә. Ауыл старостаһы булараҡ, төҙөкләндереү эштәрен һәм башҡа проблемаларҙы үҙ иңенә йөкләгән. Һеҙ, нимә ул азаматлыҡ, тигән һорау биргәс, тап Ҡадирыбыҙ күҙ алдына килеп баҫты. Азамат ир-егет тап уның кеүек булалыр, тигән уйҙамын. Ҡала ерҙәрендә етәксе урындарҙа беҙҙең егеттәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ, шуға күрәлерме, уларҙың эштәре, халҡы өсөн йәшәүе күҙгә салынып бармай. Халҡыбыҙ азаматтарын һуғыш йылдарында ла, репрессия осоронда ла меңәрләп ҡырҙылар. Был башҡорт халҡының ғәййәрлеген, тыуған ере, халҡы өсөн йәнен ҡорбан итергә лә әҙер булыу сифатын юҡҡа сығарыу өсөн махсус эшләнгәндәр кеүек тойолоп китә минә. Бөтөн күркәм шәхестәребеҙ һәр саҡ эҙәрлекләүгә дусар ителә -милләтебеҙҙең азамат ирҙәре булһа ла, хәҙер күп тә түгелдәрҙер инде шуға ла...Күренекле журналист Рәүеф Насиров "Ҡылыс ҡынға килешә" тигән очерктары йыйынтығында "Шәхес яҙмышы - ил яҙмышы" тип юҡҡа ғына әйтмәгәндер инде, күрәһең.

***Тимерйән РӘЖӘПОВ, "Хәрби хәрәкәттәр ветерандарының Башҡортостан союзы" рәйесе:*** Егет кеше үҙенең халҡын, илен яҡларлыҡ кимәлдә булырға тейеш, әгәр шулай түгел икән, уның йәшәүенең мәғәнәһе ниҙә һуң? Ирмен тигән ир-егеттең азаматлығы ил азатлығын, халҡы мәнфәғәтен яҡлап, йәшнәп йәшәүҙә һынала. Шулай тип әйткәндә, күҙ алдына Салауат батырыбыҙ, Кинйә Арыҫланов, Зәки Вәлиди, генерал Шайморатовтар күҙ алдына баҫа. Афғанстанда хәрби бурыстарын атҡарған, Чечняла хеҙмәт итеп ҡайтҡан йә шул яуҙарҙа баштарын һалған егеттәребеҙҙе лә мин ир аҫылдары тиер инем. Ләкин азаматлыҡ - ул тик яу яландарында ғына күренә торған сифат түгел. Тыныс тормошто ла азамат ирҙәрһеҙ күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Аҙмы ни йәшәйешебеҙҙә улар яҡлауына мохтаж мәсьәләләр! Һөнәре буйынса уңышҡа өлгәшеп абруй ҡаҙанған, татыу, матур ғаилә ҡорған, ул һәм ҡыҙҙарын үҙ өлгөһөндә йүнле кешеләр итеп тәрбиәләгән ир-егеттәребеҙ һәр ҡалала, һәр ауылда ла бар. Әүҙем йөмәгәтсе, кәрәк ерҙә абруйлы һүҙе, аҡылы, кәңәштәре менән ярҙамға килергә әҙер ундайҙар. Һәр замандың үҙ азаматтары була шулай итеп. Әлеге осорҙа, мәҫәлән, ауылдарҙа эшһеҙлек, эскелек күренештәренә, мәктәптәр, медпункттар ябылыуына зарланабыҙ. Ә бит йәмәғәтселек абруйы көслө урындарҙа мәктәптәрен яптырмай һаҡлап алып ҡалыуға өлгәшкәндәр ҙә бар. Күрһәтмәләр күп булыр ул юғарынан, әммә уны етенке анализлап, ҡайһы бер положениеларҙың урындағы шарттарға тап килеп бөтмәүен дәлилләй ҙә белергә, шуның менән дөйөм мәнфәғәттәрҙе яҡлай алырға ла кәрәк. Был бурыс тап әлеге азамат ир-егеттәребеҙ иңендә ятырға тейешле, тип иҫәпләйем мин. Үҙ эшен аҫып ебәреп, ауылдаштарын эш менән тәьмин иткән, мохтаждарға ярҙам күрһәткән егеттәребеҙ ҙә байтаҡ. Ҡалала ла бар ундай азаматтар. Тик тағы ла күберәк булһын ине улар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Яҡын арала Башҡортостанда күмәк балалар спортын үҫтереү буйынса программа ҡабул ителәсәк. Был хаҡта республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөнөң "Олимпик Парк" тау саңғыһы комплексында үткән кәңәшмә йомғаҡтары буйынса белдерҙе. "Башҡортостанда 107-гә яҡын спорт төрө үҫешә. Уларҙың барыһы ла ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле. Беҙ күмәк балалар спортын үҫтереү буйынса махсус программа әҙерләү хаҡында һөйләштек. Ай ярымдан уны тикшерәсәкбеҙ", - тип һөйләне Рөстәм Хәмитов.

✓Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының федераль порталы хәбәр итеүенсә, Рәсәй Хөкүмәте ипотека түләгән осорҙа ауыр финанс хәлендә ҡалған граждандарға булышлыҡ итеү өсөн Ипотека торлаҡ кредиты биреү буйынса агентлығы структуралары аша 4,5 миллиард һум аҡса бүлеү тураһында ҡарар ҡабул иткән.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов госпиталдәрҙе дарыуҙар менән тәьмин итеү һәм фармацевтика баҙарында хаҡтарҙың артыу мәсьәләһе буйынса ултырыш үткәрҙе. "Дүрт ай эсендә ҡайһы бер дарыуҙарға хаҡтар 10-15 процентҡа күтәрелде. ОРВИ һәм киҙеүҙе профилактикалау препараттарының уртаса хаҡы өс процентҡа артты", - тине вице-премьер. Билдәләнеүенсә, Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы төбәктәргә һатып алыуҙы үҙәкләштереү, тәьмин итеүселәр менән озайлы ваҡытҡа ҡаралған килешеүҙәр төҙөү, йәшәү өсөн кәрәкле мөһим дарыуҙар өлөшөн арттырыу бурыстарын ҡуйҙы.

✓Башҡортостан Хөкүмәте гидротехник ҡоролмаларҙы, күперҙәрҙе, коммуналь-энергетика селтәрҙәрен, инженерлыҡ коммуникацияларын яҙғы ташҡынға әҙерләү тураһында ҡарар сығарҙы. Документ менән ташҡынға ҡаршы комиссия составы раҫланды, уны вице-премьер Марат Мәһәҙиев етәкләй. Республика биләмәһендә яҙғы ташҡынды аварияһыҙ үткәреү буйынса саралар планы һәм һыу ташыуға контроллек итеүҙең план-графигы ҡабул ителде.

✓Йылайыр районы Башҡортостанда икенселәрҙән булып әҙәби марафон эстафетаһын ҡабул итте. Уны Ҡырмыҫҡалы районы делегацияһы тапшырҙы. Сара һуңында Йылайыр һәм Ҡырмыҫҡалы районлары араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды.

✓ *Тарихын белгән ир генә оло хазинаға эйә була ала. Әгәр уның тарихҡа ҡарата мөнәсәбәте насар, үҙ тарихын белмәй икән, ул хазиналы ла була алмай. Ир кеше өсөн ысын байлыҡ - ул боронғо тарих, тигән мәғәнә әйтелгән был мәҡәлдә.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ЙОНДОҘҘАРҘАН БЕЙЕГЕРӘК БАҪСЫ,

## ғорурыраҡ булсы, ҡусты!

**Яңыраҡ ҡына Үҙәк телевидениенан да, гәзиттәрҙә лә Рәсәй төбәктәренең береһендә хеҙмәт итеп йөрөгән 18 йәшлек кенә башҡорт егетенең үҙ-үҙенә ҡул һалыуы тураһында йән әрнеткес хәбәр булды. Йылмайып төшкән матур фотоһын да баҫҡандар.**

Һәр бер суицид осрағы шуныһы менән үкенесле: кешене үҙ ғүмеренә ҡул һалыуға алып барып еткергән, мәжбүр иткән сәбәптәрҙең мәңгелек сер булып ҡалыуы. Армияла "бабайлыҡ" власының хакимлыҡ итеүе, йәш һалдаттарҙы мәкерле рәүештә һәр төрлө мыҫҡыллауҙарға, туҡмауға, йәшертен язалауҙарға дусар итеү факттарының әле булһа йәшәп килеүе һәр кемгә билдәле. Хеҙмәт срогын бер йылға ҡәҙәр ҡыҫҡартыу ҙа ярҙам итмәне был йәһәттән. Әлеге хәлдә лә төрлө юрау-фараздар өйкәй күңелде. Шуларҙың береһе - был егет ҡыҙыҡай арҡаһында үҙ ғүмерен ҡыйған, имеш. Был - һалдаттың табутын оҙатып килеүсе хеҙмәттәштәренең фекере. Улар, бәлки, үҙ ғәйептәрен йәшерергә теләп тә шулай тип әйтергә килешкәндер - уныһы махсус органдар тикшергәс, мәғлүм булыр, әгәр улар хәҡиҡәт ебенең осон таба алһа, әлбиттә...

Ошо хәсрәтле хәлгә бәйле әйтә торған фекер башҡараҡ юҫыҡта ине. "Ҡыҙыҡай арҡаһында" тигән һүҙҙәр йөрәккә уҡ булып ҡаҙалды. Уйлап ҡараһаң, иҫең китер: тап ана шул ҡатын-ҡыҙ арҡаһында күпме аҫыл ир-егеттәребеҙ башын һала! Хеҙмәт итеп, сыныҡып, утығып ҡайтҡан, өйләнеп, донъя ҡорорға дәртләнеп йөрөгән егеттәрҙең ҡапыл төшөнкөлөккә, унан эскелеккә бирелеп, ахырҙа, үҙҙәрен үҙҙәре һәләк иткән бер нисә осраҡты яҡындан беләм. Һәм бөтәһе лә - бисә арҡаһында! (Ҡатын-ҡыҙ, тип әйтергә тел дә әйләнмәй). Был егеттәр тап ана шул һүҙҙәрендә тора белмәгән, ысын хистәрҙе байлыҡҡа, иҫәп-хисапҡа алыштырып, тоғролоҡҡа хыянат иткән тәтәйҙәр өсөн баштарын һалыуҙы мәртәбә күрҙеме лә, әллә шуны ир-егетлеккә иҫәпләнеме икән? Әгәр улар бындай аҙымға барыуҙан тыйылып, үс итеп булмағанда ла, сәмләнеп, матурлап тормошон ҡороп алып киткән булһа, аҙаҡ кем өсөн ул саҡ-саҡ йәнен фиҙа ҡыла яҙыуын аңлар ине. Һәм ғәрләнер ине, сөнки әлеге тәтәй-ҡыҙҙың уртаса статистик берәмеккә әүрелеп, йыуанайып, ҡәҙимге бисә булып йәшәп ятыуын күреп, көлөп кенә ҡуйыр ине, бәлки...

Һөлөк кеүек егеттәребеҙҙең ана шулай итеп, бәҫен-дәрәжәһен төшөрөп, ғорурлығын юғалтып, буштан ғына баштарын элмәккә алып барып тығыуы менән һис килешеп булмай. "Ҡыҙ өсөн, "тиһәләр, бигерәк тә асыу килә. Шул да булдымы сәбәп?! Азамат егеттәребеҙҙең береһе - нескә күңелле, хис-тойғоло шағирыбыҙ ҙа бит хатта юғарынан ҡарай алған бындай хәлгә:"Осто йөрәк, осто йөрәк йондоҙҙарҙан бейегерәк"... Бел: был минең йөрәк, тик инде ул бейегерәк..."

Бисә-сәсәнән юғарыраҡ тоя алмаһаң да үҙеңде, донъяға ҡарашың киңерәк, бейегерәк булһын, ине, исмаһам, ағай-эне? Яуапһыҙ мөхәббәт сире һәр кемде лә өтә, тик уны янып, ярһып, ана шул ярһыуыңды эш менән баҫып өйрәнеү элмәккә ҡарағанда миллион тапҡыр мәртәбәле, маҡтаулы һәм дә һоҡланырлыҡ бит. "Ҡыҙҙар бөтмәҫ ул донъяла, унды ал, уңғансы ал", тип өйрәтә ине бер ҡустыны еҙнәһе. Ризалашып, баш ҡағып ултырһа ла, үҙен үҙгәртә алманы был ҡусты: тик берәү өсөн йәнен фиҙа ҡылды... Ә мин быны әлегә тиклем ғәфү итә алмайым: көсһөҙлөк был, рухһыҙлыҡ был, яҙыҡлыҡ был, тип иҫәпләйем. Ниһайәт, оло ғәрлек тә был. Үлгәндәрҙән бигерәк, йәшәйем, тип тырышҡан нәҫел-нәсәбе өсөн...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*



# ИР ХАЗИНАҺЫ - ИҪКЕ ҺҮҘ,

## уның сырағы - иҫке дуҫ

**Был мәҡәлдең өҫтә генә ятҡан мәғәнәһен ҡараһаң, әллә ни иҫте китерерлек тәрән йөкмәткеһе лә юҡ һымаҡ. Тура мәғәнәһендәге фекере бик буталсыҡ был әйтемдең. Ләкин ике тапҡыр ҡабатланған "иҫке" тигән һүҙҙең синонимдарын эҙләй башлаһаң, мәҡәлдең мәғәнәһе һәлмәкләнә төшә. Улай ғына ла түгел, тап "иҫке" төшөнсәһендә әйтемдең асҡысы. Әйҙәгеҙ, уның төбөндә ниндәй аҡыл ята икәнлеген ҡарап үтәйек. Асҡысты борайыҡ та, эсенә ҡарайыҡ.**

Мәҡәлдең мәғәнәүи йөкмәткеһе "иҫке" тигән һүҙ-төшөнсәлә яталыр ул. "Иҫке" һүҙенең бер-нисә синонимы бар. Тәүгеһе - боронғо. Икенсеһе - ҡулланылыштан сыҡмаған, әммә заман үтеү менән икенсе йә өсөнсө планға күскән әйбер, йә идея. Әгәр ҙә ул төшөнсә, әйбер йә идея ҡулланылмаһа, ғәмәлгә яраҡһыҙ булһа, ул хатта иҫкегә лә әйләнмәҫ тә, онотолоп юҡҡа сығыр ине. Тимәк, иҫке һүҙ - ул шул уҡ мәҡәл, ҡарһүҙ, әйтем, боронғоларҙың аҡылы һәм тарих. Иҫке һүҙ - һыналған аҡыл, тәжрибә.

Ошоларҙан сығып ҡарағанда, "Ир хазинаһы - иҫке һүҙ..." тигәнде дөйөмләштереп, ошолай тип әйтергә була: тарихын белгән ир генә оло хазинаға эйә була ала. Әгәр уның тарихҡа ҡарата мөнәсәбәте насар, үҙ тарихын белмәй икән, ул хазиналы ла була алмай. Ир кеше өсөн ысын байлыҡ - ул боронғо тарих, тигән мәғәнә әйтелгән был мәҡәлдә.

Уның икенсе өлөшөнә килгәндә, бында ла "иҫке" һүҙе ҡабатлана. Кем ул иҫке дуҫ? Ул "иҫке һүҙ" һымаҡ уҡ, ваҡыт, заман, кешенең тәжрибәһе менән һыналып, бөгөнгәсә дуҫ тип аталған, дуҫтар исемлегенән төшөп ҡалмаған кеше. Иҫке дуҫ - ул һинең кеүек үк ҡиммәттәр һәм йолалар уратыуында йәшәгән милләттәшең. Ул - һинең телеңдә һөйләшкән, һинең биографияңа оҡшаш ғүмер юлы үткән балалыҡ дуҫың. Иҫке һүҙҙең синонимы - тарих булған һымаҡ, иҫке дуҫтың синонимы - милләттәш, хатта тағы ла дөйөмләштерһәк - милләт.

Ә нимә ул сыраҡ, тип һорар ҡайһы бер йәштәр. Сыраҡтың тәүге мәғәнәһе - ут биреүсе әйбер, ҙур ялҡынға башланғыс биреүсе ут сығанағы. Икенсеһе - бар нәмәнең сығанағы, башланғысы. Ҡараңғы, күләгәле урында йәшерен, күҙгә күренмәҫ серҙәр һаҡланыуы мөмкин. Ә ут - ҡараңғыла күренмәгәнде күрһәтеп, асыҡлап бирә, һәр нәмәнең асылын күрһәтә.

Был мәҡәлдә тотош милләтебеҙҙең йәшәү сере ята һымаҡ. Беҙ халҡыбыҙҙың тарихын сыраҡ итеп яндырып, күңелдә йөрөтһәк кенә, оло хазинаға эйә буласаҡбыҙ. Тарихыбыҙҙың яҡтылығы бөгөнгө көн аша киләсәккә төшә, тигән һүҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ИШАРА*

# ӨС ТИНЛЕК ҠАЛАҠТАР

**Күптәр ҡала ситендәге баҡсаларында алюминдан яһалған ҡалаҡ, сәнскеләрен йыуғанда, ул ҡалаҡтарға сүкеп "3 тин" тип яҙылған яҙыуҙы күреп, йылмаялыр. Тауарҙарға 3 тин, йәки башҡа хаҡ уйып, уны магазинда арттырып һатып булмаған замандар бар ине бит…**

Әлбиттә, һуңыраҡ мельхиор металынан яһалған (улар ауырыраҡ, ҡиммәтерәк) ҡалаҡтар һатылды. Мин фәннитарихи тапшырыуҙар ҡарарға яратам. "ЖЗИ" (жизнь замечательных идей) тапшырыуын алып барыусы бер көндө: "Алюминдан ҡалаҡтар яһау ысулы уйлап табылғас, иң хөрмәтле кешеләр ҡунаҡҡа килһә - алюмин, урта хәллеләргә - алтын, бик үк ҡәҙерле булмағандарына көмөш ҡалаҡ бирер булғандар", - тип, көлдөрөп алды. Ысыны шулай булғандыр. Әле генә беҙгә көлкө тойола. Хәйер, ябай ғына, тинләп һаналған тормошоборҙан ҡыйбатсылыҡҡа күсһәк тә, һәр бер "көрсөк" замандан ҡалған көләмәстәрҙе һөйләп йылмаябыҙ инде шулай. Иҫегеҙҙәлер: көрсөк яҡынлаша, тигән хәбәрҙе ишеткәс, берәү бөтөн аҡсаһын тотоноп, бер тоҡ тары, бер-ике тоҡ он, тағы бер тоҡ ҡарабойҙай, бер тоҡ һоло һатып алып, бер бүлмәле фатирының һәр мөйөшөнә урынлаштырып сыҡҡан, ти. Бер тоҡ шәкәргә урын ҡалмағас, уныһын коридорға ҡуйған. Бер саҡ төн уртаһында һыуһап, уянып киткән был. Утты ла яндырмай (электрҙы экономияларға кәрәк бит) аш бүлмәһенә йүнәлһә, бер тоҡ шәкәргә абынып, ҡолап киткән дә, тубығының ауыртыуына сыҙай алмай: "Ҡасан бөтөр икән илдә был аслыҡ?" - тип илап ебәргән...

Эйе, ошондай "әүҙем"дәр илебеҙҙә көрсөктәр ойоштороргa ярҙам итә инде. Тағы бер төркөм әүҙемдәр иһә тауарҙарының хаҡын күпкә арттырып һатып, кешенең былай ҙа йоҡа ғына кеҫәһен бушата...

Әйткәндәй, элек урам сатында ҡаплы булавкалар һатып ултырған ханымды осратып: "Һаумыһығыҙ, эшегеҙҙе ташланығыҙмы ни? Хәҙер кем миңә ул йылтыр быяла йәбештерелгән булавкаларҙы арзанырaҡ хаҡҡа һатыр инде?" - тип өндәштем. Ханым: "Гонаһлы эш урыны булды ул. Хужабыҙ базанан һәр булавканы 100-әр һумға һатып ала ла, халыҡҡа (балаларға, хаҡлы ялдағыларға) һәр береһен 300 һумға һатырға ҡуша. Оялып, ҡайһы берҙәрен арзаныраҡҡа һата инем. Әле өйҙә ултырам, пенсияма йәшәйем. Һаулығым да һәйбәтләнде", - тип, моңһоу йылмайҙы. Ниңәлер шунда: "Тауарҙарҙың хаҡтарын арттырып һатыусы башҡа алыпһатарҙар ниндәй хис-тойғо кисерә икән? Йөрәктәре һыҙмаймы икән?" - тигән уй килде башыма...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев 2015 йылда Рәсәй Федерацияһы субъекттарының Берҙәм дәүләт имтиханын үткәреүгә әҙерлеге тураһында видеоселектор кәңәшмә үткәрҙе. Унда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты. 2015 йылда Рәсәйҙә 715 мең кеше, Башҡортостанда 22,5 мең кеше Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырасаҡ.

✓Быйыл ауыл хужалығына ярҙам күрһәтеү өсөн Башҡортостанға дөйөм күләме 1,12 миллиард һумлыҡ субсидия бирелә. Тейешле күрһәтмә Рәсәй Хөкүмәте сайтында баҫылған. Республикаға хужалыҡ итеүҙең кесе формаларына кредит буйынса процент ставкаһының бер өлөшөн ҡаплауға 180,8 миллион һум, үҫемлекселекте үҫтереү, үҫемлекселек продукцияһын эшкәртеүгә һәм һатыуға ҡыҫҡа ваҡытлы кредиттар буйынса процент ставкаһының бер өлөшөн ҡаплауға 488,8 миллион һум бүленәсәк.

✓Өфө илдә иң юғары торлаҡ хаҡы буйынса алтынсы урынды биләй. Рәсәй торлаҡ баҙарындағы хәлдәр рейтингына ярашлы, 2015 йылдың ғинуарына Мәскәү исемлектә тәүге урынды биләй, унда бер квадрат метрҙың уртаса хаҡы 199 мең һум тәшкил итә. Артабан Санкт-Петербург, Мәскәү өлкәһе, Екатеринбург һәм Түбәнге Новгород ҡалалары килә.Рейтингҡа ярашлы, ағымдағы йылдың ғинуарында Өфөлә торлаҡтың квадрат метрының уртаса хаҡы 64,1 мең һум тәшкил итте.

✓Ғинуар баштарына Башҡортостанда 1123,1 мең пенсия алыусы теркәлгән. Уҙған йылда уларҙың һаны 15,9 мең кешегә артҡан, тип хәбәр итте Башҡортостанстат. Ғинуар баштарына Башҡортостанда пенсияның уртаса күләме айына 10286,9 һум тәшкил итә (бер йыл элек - 9437,8 һум). Ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһы - айына уртаса 10895,2 һум (9712,7).

✓1 мартта Өфөлә ШОС һәм БРИКС саммиттарында эшләйәсәк ирекмәндәрҙең составы билдәле буласаҡ. Әлеге ваҡытта ирекмәндәрҙе һайлап алыуҙың финал этабы - кандидаттар менән әңгәмәләшеү бара. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ШОС һәм БРИКС саммиттарында волонтер булараҡ ҡатнашыуға 9500 кеше ғариза биргән, шуларҙың 2000-дән ашыуы уҡыуҙар үткән. Өфөләге халыҡ-ара саммиттарҙа эшләү өсөн 500 ирекмән кәрәк.

**“Башинформ”дан.**

✓ *"Олатаһы исемен интернетҡа ҡуйыр өсөн туғандарынан, интернеттан мәғлүмәт эҙләгән бала бер ваҡытта ла яугирҙарға, ветерандарға, ил тарихына битараф ҡалмаясаҡ", - тине үҙ сығышында Александр Дёгтев.*



*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ЙОРТ АЛДЫНДА БЫУА БАР...

**Гәзит биттәрендә баҡсасылар менән бәйле аҡса эшләү юлы яҡтыртылғас, мин дә үҙемдең ошо өлкәгә ҡағылышлы дуҫым менән алып барған килемле эшмәкәрлегебеҙ менән таныштырырға ҡарар иттем. Бәлки, берәйһенең күңеленә ятыр һәм киләһе йәй ошо ысул ярҙамында аҡса эшләр.**

Һәр баҡсасы ваҡыты-ваҡыты менән үҙ биләмәһендә бәләкәй генә булһа ла һыу яткылығы булдырыу хаҡында хыялллана. Был хыялды тормошҡа ашырыу әллә ни ауыр түгел, ләкин күптәрҙең быға йә ваҡыты юҡ, йә ҡулы эш белмәй. Ошондай саҡта дуҫым менән беҙ эшкә тотонабыҙ.

Бәләкәй генә быуа өсөн, тәү сиратта, урынды дөрөҫ һайлау мөһим. Ул тәҙрәнән яҡшы күренергә, шул уҡ ваҡытта ҡояш нуры тура төшмәслек урында булырға тейеш. Ә формаһын заказ биреүсенең теләгенән сығып эшләйһең.

Урын һайланғас, төҙөлөш эштәренә тотонабыҙ. Тәү сиратта соҡор ҡаҙабыҙ. Уның стеналары баҫҡыс рәүешендә булырға тейеш. Тәүҙә 20 сантиметр тирәһе яр сите биләмәһе, унан 40 сантиметрлап быуаның һай ере, иң аҙаҡтан тәрән урыны (70-150 сантиметр) эшләнә. Был зоналар араһында тупраҡ тайпылышының градусы 30 йәки унан күберәктә тәшкил итеүе мөһим, сөнки соҡорҙоң стеналары емерелеп төшөргә мөмкин. Ҡаҙылған соҡорҙоң төбөн осло таштарҙан, ағас тамырҙарынан һәм башҡа осло әйберҙәрҙән ентекләп таҙартабыҙ, сөнки бар эштең юҡҡа сығыуы бар. Әҙер соҡорҙоң төбөнә пленка йәйәбеҙ һәм уның ялғанған ерҙәрен махсус елем менән йәбештерәбеҙ. Пленка ситтәрен яр ситен биҙәү өсөн ҡулланылған таштар һәм плиткалар менән нығытырға онотмайбыҙ. Артабан соҡор төбөнә ҡом түшәп, үҫентеләр ултыртып, һыу тултырырға һәм, теләк булғанда, матурлыҡ өсөн балыҡтар ебәрергә генә ҡала.

Соҡорҙан ҡаҙып алынған тупраҡты һыу яткылығы эргәһенә матур тау итеп өйөргә һәм унан быуаға шишмә ағыҙып төшөрөргә йәки өҫтөндә фонтан эшләргә була.

Эш башлағаныбыҙға ике йыл. Ошо ваҡыт эсендә тиҫтәләгән быуа эшләнек. Хаҡты һыу яткылығының ҙурлығына, ҡатмарлығына һәм эш өсөн киткән ваҡытҡа ҡарап ҡуябыҙ. Заказ буйынса тәүге быуаны эшләгәнгә тиклем, кәләштәрҙән әрләнә-әрләнә, үҙебеҙҙең баҡса биләмәләрен ҡаҙып бөттөк. Хәҙер баҡсаларыбыҙҙа икешәр быуа бар. Шуға күрә был эшкә тотонорға теләгәндәргә, махсус китаптар уҡырға һәм үҙ биләмәгеҙҙә быуа эшләп ҡарарға саҡырам. Был, заказ биреүсенең баҡсаһын боҙоп, ҡыҙарабүртенә хәлдә төҙәтергә тырышыуға ҡарағанда, күпкә яҡшыраҡ. Шулай уҡ ҡулығыҙҙы шымартыу маҡсатынан, дуҫтарығыҙға һәм туғандарығыҙға ла быуа эшләй алаһығыҙ. Аҙаҡ күрһәткән хеҙмәтегеҙ хаҡында төрлө сығанаҡтарға реклама бирергә һәм заказ көтөргә генә ҡала. Ә заказдар, һүҙемә ышанығыҙ, буласаҡ. Тимәк, кеҫәгеҙгә аҡса ла инеп ятасаҡ. Тәүәккәллек кенә кәрәк.

**Илсур ДӘҮЛӘТКИРӘЕВ.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ҮЛЕМҺЕҘ ПОЛК...

## Өфө урамдары буйлап үтәсәк



**"Башинформ" мәғлүмәт агентлығында федераль кимәлдәге "Быуындар йөрәгендә - хәтер һәм ғорурлыҡ" проектының Башҡортостан берлеге етәкселәре - БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Эльвира Айытҡолова, Александр Дёгтев, "Үлемһеҙ полк" бөтә Рәсәй штабының Өфө ҡалаһындағы координаторы Вадим Курилов, Эҙләү отрядтары төбәк фонды рәйесе Илдар Бикбаев, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр палатаһы вәкилдәре республика журналистары менән осрашты. Кәңәшмә йәш быуынды Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын лайыҡлы ҡаршы алыу сараларына йәлеп итеүгә арналды.**

Сығыштарҙан билдәле булыуынса, Өфө ҡалаһы йәмәғәтселеге быйыл да "Үлемһеҙ полк" бөтә Рәсәй акцияһында ҡатнашасаҡ. Былтыр был сарала 1 меңдән алып 4 меңгә тиклем кеше ҡатнашһа, быйыл ҡатнашыусылар һаны бермә-бер артыуы - 15-20 мең кеше тәшкил итеүе көтөлә. Нимә ул "Үлемһеҙ полк" проекты? Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендә лә шаңдау таптҡан был проекттың маҡсаты ябай: Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған яугирҙарҙы, йәки унан әйләнеп ҡайтып, баҡыйлыҡҡа күскән ветерандарҙы хәтергә алыу, йәштәрҙе, балаларҙы олатайҙар ҡаһарманлығы менән таныштырыу, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан туғандарына ҡыҙыҡһыныу уятыу. Был сарала ҡатнашыу өсөн бары тик үҙ һалдатыңдың (ветеран туғаныңдың) фотоһүрәтенең ҙурайтылған вариантын тотоп, уның аҫтына батырҙың исем-шәрифен һәм хәрби дәрәжәһен күрһәтеп, 7 майҙа баш ҡаланың Совет майҙанына килеү талап ителә. Ойоштороусылар мәктәп уҡыусыларын, студенттарҙы, хеҙмәткәрҙәрҙе оло эшкә - яугирҙар яҙмышын, биографияһын өйрәнеп, **www.moypolk.ru** сайтындағы "Олатайыңды полкҡа яҙ" тигән бүлеккә теркәргә саҡыра. "Олатаһы исемен интернетҡа ҡуйыр өсөн туғандарынан, интернеттан мәғлүмәт эҙләгән бала бер ваҡытта ла яугирҙарға, ветерандарға, ил тарихына битараф ҡалмаясаҡ", - тине үҙ сығышында Александр Дёгтев.

Шулай уҡ Йәштәр палатаһы ағзаһы Айгөл Теләшеваның "Ветеран менән селфи" проекты менән таныштырыуы ла ҡыҙыҡһыныу уятты. Был проект социаль селтәрҙәрҙә ойошторола. Быны өсөн фотоғыҙға **#мойветеран** билдәһен ҡуйырға, фотоһүрәткә ветеран тураһында ентекле мәғлүмәт беркетергә кәрәк. Селфиҙар "Бына ул мин, мин - теремен. Тап ошо ветеран батырлығы арҡаһында донъяға килгәнмен, йәшәйем", тигән йөкмәткегә эйә", - тине Айгөл Теләшева.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# "САЛАУАТ ЮЛАЕВ" БОҘҒА СЫҒАСАҠ ӘЛЕ

**Был аҙнала Мәскәүҙең Арбитраж суды ҡарары буйынса "Урал-Инвест" яуаплылығы сикләнгән ширкәттән "Система" АФК-һы файҙаһына тартып алынған 70,7 миллиард һум корпорацияны үҫтереүгә, Рәсәйҙә инвестицияларҙы финанслауға, корпорация бүлексәләре булған төбәктәрҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда социаль программаларҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтеләсәк.**

Ошо ваҡиғаға бәйле "Урал" Мәрхәмәтлек фонды үҙенең программаларын финанслауҙы туктатыуы тураһында белдергәйне. Шул сәбәпле, "Салауат Юлаев", "Торос" (Нефтекама) хоккей клубтарының артабанғы яҙмышы бик күп һорауҙар тыуҙырҙы. Республика башлығының матбуғат секретары Артем Вәлиев әйтеүенсә, Башҡортостанда башланған проекттарҙы һәм төҙөлөштәрҙе, шул иҫәптән Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей клубын финанслау республика властары тарафынан дауам ителәсәк.

Был мәсьәләгә ҡарата БР Сауҙа-сәнәғәт палатаһы президенты Юрий Пустовгаров, Фондтың хоккей клубы менән килешеүе 30 апрелгә тиклем ғәмәлдә, әгәр ҙә инде форс-мажор хәл-торош килеп тыуа ҡалһа, икенсе көндән финанслауҙы республика Хөкүмәте үҙ өҫтөнә аласаҡ, тип белдерҙе.

"Өфө командаһына, бәлки, финанс проблемаһын үҙ елкәһендә татырға кәрәк тә булғандыр, сөнки командала тотонолған аҡсаларға тап килмәгән һөҙөмтә күрһәтте, - тип белдерә был мәсьәләгә мөнәсәбәтен Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры, Өфө хоккейы тәрбиәләнеүсеһе Сергей Ғимаев. - "Салауат Юлаев" Башҡортостан спортының лидеры булып тора. Әгәр шәп менеджерҙар табылһа, барыны ла яҡшы буласаҡ. Әммә ирекле аҡса күпкә кәмейәсәк һәм ҙур аҡсаға кемде етте - шуны һатып алмаясаҡтар. Клуб экономиялы буласаҡ..."

Ғөмүмән, "Урал" хәйриә фондының спонсорлыҡ проекттарын туктатыуға бәйле "Салауат Юлаев" хоккей клубын финанслау өҙөлмәй. Ул артабан да бюджеттан тыш сығанаҡтар иҫәбенә ғәмәлгә ашырыласаҡ. Был хаҡта республика Башлығы Рөстәм Хәмитов балалар спортын үҫтереү мәсьәләләренә арналған кәңәшмә йомғаҡтары буйынса белдерҙе.

**"Башинформ".**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостанда Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына ҡарата "Ҡәҙерләйбеҙ. Һаҡлайбыҙ. Хәтерләйбеҙ" республика күргәҙмәләр проекты старт ала. Проект сиктәрендә йыл дауамында республика музейҙарында 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышына арналған күргәҙмәләр ойоштороласаҡ, яңыртылған экспозициялар асыласаҡ.Башҡортостандың муниципаль музейҙарында республикалағы төп музейҙарҙың күсмә күргәҙмәләре үтәсәк. Бөтәһе 100-ҙән ашыу күргәҙмә ойоштороу ҡаралған.

✓ Башҡортостанда республиканың йәшелсәселәр союзы булдырылды. Ойошма составына төбәктең алдынғы йәшелсәселек хужалыҡтары етәкселәре инде. Рәйес итеп элегерәк БР ауыл хужалығы министры урынбаҫары һәм Хөкүмәт Аппаратының аграр мәсьәләләр буйынса кәңәшсеһе вазифаларын биләгән Артур Ноғоманов һайланды. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда 2010 йылда 255 мең тонна, 2014 йылда шул уҡ майҙандарҙа 350 тонна йәшелсә үҫтерелгән.

✓ Әҙәбиәт йылында баш ҡалала "Бында уҡыйҙар!" акцияһы ойошторорға тәҡдим ителде. Был хаҡта 17 февралдә Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы ҡарамағындағы Йәмәғәт советында ведомство етәксеһе Борис Мелкоедов белдерҙе."Кешеләр кафе, автовокзал, һаулыҡ һаҡлау йәки дәүләт хеҙмәттәре учреждениеларында күп ваҡытын көтөп уҙғара. Беҙ йәмәғәт урындарында китап кәштәләрен ҡуйырға тәҡдим итәбеҙ", - тине Борис Мелкоедов. Мини-китапханалар ҡала халҡының китаптарынан тораса́ҡ тип күҙаллана.

✓ Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры Һиндостанда XXVIII "Сурадж Кунд Мела" халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашты. Ҡурсаҡ театры менән Һиндостанды күптәнге дуҫлыҡ ептәре бәйләй. 1987 йылда уҡ танылған режиссер Павел Мельниченко "Рамаяна" эпосы нигеҙендә "Һинд легендаһы" спектаклен ҡуя. Тамаша эпостың тыуған иле Һиндостанда ҙур уңыш ҡазана һәм Джавахарлал Неру исемендәге премияға лайыҡ була. Әлеге көнгә тиклем Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры ошо наградаға лайыҡ булған Рәсәйҙәге берҙән-бер театр.

ӘҘӘБИӘТ ЙЫЛЫ ОСРАШЫУҘАРЫ

# ӘҘИП ДӘРЕСЕ




**М.Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында Әҙәбиәт йылы айҡанлы матур саралар үткәрелә башланы. Иң тәүге иҫтәлекле кисәгә Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С. Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, халҡыбыҙ яратып уҡыған "Мәңгелек урман", "Зәңгәр тауҙа аҡ болан", "Таң менән сыҡ юлдарға", "Яҙғы ташҡындар алдынан" кеүек билдәле китаптар авторы Ноғман Сөләймән улы Мусин саҡырылды.**

Ноғман Мусин гимназияның 8-се синыф уҡыусыларына үткер проблемалы повестарының береһе "Йыртҡыс тиреһе" буйынса йомғаҡлау дәресе үткәрҙе. Халыҡ яҙыусыһы үҙе таҡта алдында тороп, әҫәренә тулы анализ биреп, яҙылыу тарихына байҡау яһаны. Мәктәп уҡыусылары Ноғман Сөләймән улының дәресенән бик ҡәнәғәт ҡалды. Шулай булмайса, бындай бәхет кемгә эләгә әле! Әйткәндәй, ҡасандыр уҡытыусы булып эшләгән әҙип тә был осрашыуҙан һуң хеҙмәт юлын ҡайтанан иҫенә төшөрөп алды. Унын һөйләгән һәр фәһемле һүҙен, уй-фекерен балалар, уҡытыусылар, саҡырылған ҡунаҡтар ҙа йотлоғоп тыңланы. Сөнки Ноғман Сөләймән улы һәр кемгә иғтибарын бүлеп өлгөрҙө, ҡыҙыҡһынып бирелгән бер һорауҙы ла яуапһыҙ ҡалдырманы. Балалар яҙыусының ижадын яҡшы өйрәнеп, анализлағандан һуң, унын заман үҙгәрештәренә бирешмәүен, кешеләрҙе һаман да тормош, ғүмер, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ тураһында уйланырға мәжбүр итеүен билдәләне. Гимназия уҡыусыһы Диана Кәримова иһә, Ноғман Мусиндың "Һайлап алған яҙмыш" әҫәре героиняһының прототибын белеүе тураһында әйткәс, әңгәмә тағы ла йәнләнеберәк китте. Әммә тәмле нәмә күп булмай, тигән кеүек, дәрес тиҙ генә аҙағына яҡынлашты. "Тормошто яратығыҙ, эшегеҙҙән йәм таба белегеҙ, кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттә булығыҙ", - тигән теләктәре менән бергә, иң әүҙем, дәрескә яҡшы әҙерләнеп килеүсе уҡыусыларҙың көндәлектәренә "бишле" билдәләре ҡуйып хушлашты яҙыусы.

Гимназия уҡыусылары әҙипте тиҙ генә ҡайтарып ебәрергә теләмәне, тамаша залына саҡырып, сағыу концерт бүләк итте. Беҙ уҡыусыларға онотолмаҫ минуттар бүләк иткәне өсөн Ноғман Сөләймән улына рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Бындай матур башланғысты йыл буйына дауам итергә, гимназия уҡыусыларын артабан да билдәле башҡорт зыялылары, әҙиптәре менән осраштырып, фәһемле саралар үткәрергә ниәтләйбеҙ.

**Айгөл ИГЕЛЕКОВА,**
**М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ




# ЕҢЕҮГӘ БАҒЫШЛАНҒАН ЕҢЕҮ

**Сибай ҡалаһының Балалар ижады үҙәгендә "Урал аръяғында шашка спортын үҫтереү буйынса проектты тормошҡа ашырыу йомғаҡтары" тип аталған түңәрәк ҡор үтте.**

Унын эшендә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева, Халыҡ-ара шашка буйынса биш тапҡыр донъя чемпионы, Башҡортостандың Шашка федерацияһы рәйесе Тамара Танһыҡҡужина, 2014 йылғы Халыҡ-ара шашка буйынса донъя чемпионы, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр палатаһы ағзаһы Айнур Шәйбәков, Баймаҡ, Бөрйән, Йылайыр, Хәйбулла райондары, Баймаҡ һәм Сибай ҡалалары спортсылары һәм тренерҙары ҡатнашты.

Был проект 2012 йылда башлана һәм өс йыл эсендә һиҙелерлек ыңғай һөҙөмтәләр бар. 2 мең бала шашка спорты менән шөғөлләнеү һәм төрлө турнирҙарҙа ҡатнашыу мөмкинлегенә эйә була. Проект сиктәрендә шашка уйыны нигеҙҙәренә өйрәтеү буйынса методик программа әҙерләнә. Шашка спортын популярлаштырыу һәм үҫтереү өсөн ауылдарға 1400 комплект шашка, 700 таҡта, 600-ҙән ашыу китап һәм әсбап, 35 күргәҙмә таҡта тапшырылған. Сибай, Баймаҡ ҡалаларында, Аҡъяр, Йылайыр ауылдарындағы балалар баҡсаларында һәм мәктәптәрендә турнирҙар уҙғарыла. Былтыр йәш шашкасылар беренсе тапҡыр Рәсәй наградаларына лайыҡ була. Ойоштороусылар күҙаллауынса, проектты артабан үҫтереү этабы - был спорт төрөнә республиканың барлыҡ райондары уҡыусыларын йәлеп итеү һәм уларҙы халыҡ-ара шашка уйнарға өйрәтеү.

Форум сиктәрендә ойошторолған һәм Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына бағышланған шашка турнирында барлығы 12 спортсы ҡатнашты. Ярыш финалсылары уйын барышында Тамара Танһыҡҡужина һәм Айнур Шәйбәков менән бер ваҡытта уйнау сеансында үҙ көсөн һынап ҡараны. Ә Баймаҡтан килгән беренсе синыф уҡыусыһы Руслан Маркелов киләһе аҙнала Костромала үтәсәк Рәсәй кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнашыу бәхетен яуланы. Барлыҡ еңеүселәр депутат һәм чемпиондар ҡулынан ҡиммәтле бүләктәр алды.

**Ғәлиә НӘБИЕВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# ИР ҠУШТАНЫ ИЛГӘ ЯРАҒАН,

## ҡатын ҡуштаны иргә яраған

Кемгә нисектер, әммә был мәҡәлдәге "ҡуштан" һүҙе бик намыҫҡа тейә. Нисек кенә ыңғай ишара эҙләп, ошо ҡуштанлыҡҡа ҡушылып, унын менән килешергә тырышып ҡарамайһың - килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Бәлки, халҡыбыҙ осорона, мәленә ярашлы, кире мәғәнә лә һалмағандыр был мәҡәлгә. Уйлап ҡараһаң, ҡуштанлана белеү, бер яҡтан, әлеге толерантлы булыу тигәнде лә хәтерләтеп ҡуя түгелме? Ни генә тиһәң дә, "илгә яраған" тиелә бит, ә ил - ул халыҡ, йәмәғәтселек. Илгә ярай белеү - тимәк, халыҡ ышанысын ҡаҙанып, ниндәйҙер дәрәжәгә өлгәшеүҙе лә инҡар итмәй: "яраған", тимәк. Ә бына дәрәжәгә өлгәшеү, тигәндән... Фәҡәт халыҡ мәнфәғәтен алға ҡуйып йәшәгәндәрҙән, ни өсөндөр, аслыҡтан хәлһеҙләнеп, аңын юғалтып ҡолаған аҙыҡ-түлек наркомы Цюрупа ғына күҙ алдына килә... Хәҙерге заманда дәрәжәгә өлгәшеү өсөн халыҡҡа, унан бигерәк - юғары түрәләргә ярай белеү кәрәк. Халыҡҡа ярап та, юғарыға ярамаһаң, тимәк, илгә ярамайһың. Бына ни өсөн кәрәк булып сыға ҡуштанланыу, сөнки халыҡҡа ла, юғарыға ла бер юлы яҡшы күренеү мөмкин булмаған хәл. Ҡуштанлана, ике яҡҡа ла ярай белә торған “һәләте” булғандар ғына үҫә, башҡалар менән идара итә - йәғни, илгә ярай.

Мәҡәлдең икенсе яртыһы менән дә шундай уҡ хәл. Өйҙә тыныслыҡ һаҡлайым, тигән ҡатын, меҫкен, ни эшләһен - иренә ярарға тырыша инде. Ҡатындың ҡуштан булыуын шунын өсөн дә яманлап булмай, унын ҡарауы - ир һәр саҡ ҡәнәғәт һәм өйҙә тыныслыҡ "хөкөм һөрә". Быныӊ "ҡуштан" ҡатынға нисек бирелеүе мөһим түгел, тик түҙемлек кенә бирһен уға Хоҙай... Ире менән гел ыҙғышып, боларып йәшәгән бер ҡатынды белә инем: мин йәш саҡта бергә эшләп алғайныҡ. Башҡа апайҙар күҙе-башы күгәреп эшкә килгән был ҡатынҡайға гел генә: "Юхала һуң әҙерәк, ниңә оторо өндәшәһең? Үҙеңде генә бөтөрәһең бит... Бер артына, бер алдына сыҡ, маҡта, матур һүҙҙәреңде йәлләмә. Эштән ҡайтыуына йылмайып-көлөп тор", - тип аҡыл өйрәткәндәренә гел йәнем көйә ине. Йәшлегем менән: "Ниндәй ике йөҙлөләр былар..." - тип уйлағанымды хәтерләйем. Әле аңлайым: ул апайҙар үҙ тормош тәжрибәләре менән уртаҡлашҡан һәм бик аҡыллы кәңәш биргәндәр...

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тәмләткестәр ҙә дауа

❖ Тәмләткестәр ашҡа тәм, хуш еҫ биреп кенә ҡалмай, ә ауырыуҙарҙы ла дауалай. Мәҫәлән, ангинаны тиҙ генә бөтөрөү өсөн 32 бөртөк ҡәнәферҙе эмаль һауытҡа һалып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, йылы итеп төрөп, төнәтергә. 12 сәғәттән һуң һөҙөп, ауыртҡан тамаҡты сайҡатырға. Тәүлегенә 4 тапҡыр ҡабатларға.

❖ Гломерулонефритты дауалау өсөн 3 балғалаҡ кориандр орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Ауырлы саҡта, миокард инфаркты, тромбофлебит ваҡытында был дауаны ҡулланыу ярамай.

❖ Ашҡаҙан ауыртҡанда 1 ҡалаҡ кориандрҙы эмаль һауытҡа һалып, ярты литр һыу ҡойоп, талғын утта ҡайнау хәтенә еткерергә, һөҙөргә һәм термосҡа ҡойорға. Көнөнә 2-3 тапҡыр 50 грамм эсергә.

❖ Юғары ҡан баҫымын нормаға килтерергә корица ярҙам итә. 1 балғалаҡ корицаны 1 стакан ҡатыҡҡа һалып болғатырға һәм йоҡлар алдынан эсергә.

❖ Һейҙек-енес өлкәһе системаһы эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн 100 грамм ҡуянтубыҡ (пастернак) тамырына 1 литр аҡ шарап, ярты литр һыу өҫтәп, ҡайнау хәленә еткерергә, 10 минут талғын утта ҡайнатырға. Кәстрүлде уттан алғас та 5 ҡалаҡ бал, 1 лимон һуты, 10 тамсы 5 процентлы йод ҡушып, болғатырға, һөҙөргә һәм көнө буйы йотомлап эсергә.

❖ Аяҡ бәшмәкләһә, 200 грамм лавр япрағына ҡайнар һыу, бер аҙ һеркә өҫтәп бешектәргә лә, ошо төнәтмәгә аяҡтарҙы тығып ултырырға. Дауаны көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

## Ҡырылдай астмаһы

❖ 50-шәр грамм алтей үләне тамыры менән кейәү үләнен бергә ҡушырға. 4 балғалаҡ үлән ҡатнашамаһын эмаль һауытҡа һалып, 1 стакан һалҡын һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә, һуңынан талғын утта 5 минут ҡайнатырға. 3 өлөшкә бүлеп, көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 1 сәғәт алда эсергә. Һауыҡҡансы көн һайын ҡабатларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Аң, тинем, сөнки ҡатын-ҡыҙҙың киләттәге муллыҡты, етешлекте тәьмин итеү өсөн ирҙең ниндәй көс һалғанын да, уның именлеген тәьмин итеүсе үҙенең өсләтә яуаплылығын да тәрәндән аңлауы фарыҙ бит.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БОЛАН ДА...
## изге йәнлек

**Ниндәйҙер йәнлектең йәки хайуандың тотемға әйләнеүе менән кешеләр символик рәүештә уны изгеләштерә башлай. Этнографик һәм археологик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, борон был тотем-боланға ла ҡағылған. Бөгөн дә ҡайһы бер өйҙәрҙә ишек башына элеп ҡуйылған болан мөгөҙҙәре тап ошоноң тураһында һөйләй ҙә инде.**

Башҡорт халҡында артыҡ күҙәтелмәһә лә, башҡа халыҡтарҙа, бигерәк тә яҡуттарҙа һәм тофаларҙа салынған ҡыр боланын тунағанда ҡанын ергә ағыҙмағандар, йөрәген үпкәләренән һәм башынан айырмағандар. Тиреһен тунап алғандан һуң һунар иткәндә яһаған яраны ҡаплағандар. Боландың башын, йөрәк-үпкәһен, ҡалаҡ һөйәген, тиреһен күмгәндәр, сөнки болан кире терелә, тип ышанғандар. Ишек башына болан мөгөҙөн элеп ҡуйыу, бәлки, тап ошо тотемистик ҡараштар менән бәйләлер. Һуңғараҡ был йола бөтөнләй икенсе мәғәнә алған. Боландың баш һөйәген, мөгөҙҙәрен, һөйәктәрен яуыз көстәргә ҡаршы ҡуллана башлайҙар. Мәҫәлән, ишек башына ҡағып ҡуйылған болан мөгөҙө - яуыз көстәрҙән (Хәйбулла районы), күҙ тейеүҙән (Ырымбур өлкәһе) һаҡлай, йәки баланы аналыҡтағы үсеше яҡшы үтеүгә ярҙам итә (ғәйнә башҡорттары), тиҙәр. Әгәр ҙә болан мөгөҙөн аҡ сепрәк менән һөртөп, аҙаҡтан был сепрәкте һыуҙа сайҡап, һыуын ауырлы ҡатынға эсерһәң, ул малай табасаҡ, тигән ышаныуҙар ҙа булған.

Тотем яйлап кешеләрҙең тормошона йоғонто яһау һәләттәренә эйә мифологик тәүбабаға ла әүерелгән. Төньяҡ районларҙа йәшәүсе башҡорттарҙың легендаларынан күренеүенсә, болан балаларҙың һәм етемдәрҙең һаҡсыһы булараҡ һүрәтләнә. Ул шулай уҡ нәҫелде ҡурсалап тороусы, бәләгә ҡалған кешеләрҙе ҡотҡарыусы ла. Аҡ болан бәхет һәм муллыҡ символы һанала.

Ырымбур башҡорттары билдәләүенсә, болан изге йәнлек булараҡ, йортҡа байлыҡ һәм муллыҡ алып килә. "Болан мөгөҙөн табһаң, мотлаҡ алырға кәрәк, сөнки ул бәхет алып килә", "Һунарға сығыр алдынан болан мөгөҙөнә ҡулың менән тейһәң, юлың уңа", "Онға әйләндерелгән болан мөгөҙө тәнәтмәһе ырыҫҡа өлгәшергә булышлыҡ итә" тигән ышаныуҙар халыҡ араһында бөгөн дә бар.

Боландың мөгөҙө менән тиреһе бар халыҡтарҙа ла һаҡлаусы сифатында кейемдәрҙә ҡулланылған. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының һарауыстары, еләне, түшелдерегә, сергеһе, шулай уҡ атҡа һала торған эйәре, күсенгән саҡта атҡа һалынған түшәк-ҡаралтыны бәйләү өсөн ҡулланылған ҡарткылар "болан мөгөҙө" тип аталған орнамент менән биҙәлгән. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында "болан мөгөҙө" биҙәге тик ҡатын-ҡыҙҙарҙың әйберенә генә һалынған һәм ул мотлаҡ ҡара ерлеккә ҡыҙыл эптәр менән сигелгән. Биҙәк ҡатын-ҡыҙы һаҡлап торған. Н. Бикбулатов был биҙәкте ҡуҫҡар тип атай һәм ул тамыры менән бик боронғо осорҙарға тоташа.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ӨС БЫУЫН ФЕКЕРЕ

# ӨЛКӘН ИРҘӘР "ҠОРОРАҠ",
## ә йәштәр хислерәк...



**Бөгөнгө заман ир-егеттәренә ниндәйерәк баһа бирәһегеҙ?**

**Сания СӨЛӘЙМӘНОВА, 65 йәш, Учалы ҡалаһы:** Барыһын да бер ҡалыпҡа һалып фекер йөрөтөү дөрөҫ булмаҫ, шулай ҙа дөйөм һыҙаттарҙы билдәләп үтергә мөмкин. Минең йәшлек йылдарым комсомолдың ҡайнап торған, партияның әүҙем эшләгән, колхоз-совхоздарҙың сәскә атҡан сағына тура килде. Коллективлыҡ тойғоһо көслө булған быуын партия билдәләгән бурыстарҙы, алдына ҡуйылған "биш йыллыҡ"тар планын үтәү маҡсатында ал-ял белмәй эшләне. Ә хеҙмәткә хөрмәт булған ерҙә кешенең шәхси сифаттары ла яҡшыраҡ була. Шуға күрә лә минең йәштәгеләрҙең күбеһенә ялҡаулыҡ, яуапһыҙлыҡ, битарафлыҡ кеүек сифаттар хас түгел. Ә йәшерәк быуын был йәһәттән "аҡһай". Бигерәк тә ир-егеттәр вағланды. Мин бында кәүҙә бейеклеген түгел, ә күңел байлығын күҙ уңында тотам. Ғаиләгә ҡарата мөнәсәбәттәрҙә лә айырмалыҡтар күп. Әгәр ҙә элек атай кешенең ғаилә башлығы булыуын, һуңғы һүҙҙе ул әйтергә тейешлеген берәү ҙә инҡар итмәһә, бөгөнгө көндәге атайҙар араһында иҫәпкә бар-һанға юҡ булыусылар күп. Ғаиләнең үҙәге, уның терәге һаналыу өсөн донъяға ир енесенән булып тыуыу ғына етмәй. Былдай хоҡуҡты яулау өсөн ҡатыныңдың, балаларыңдың һәр көнөн бәхетле итеү маҡсатын уңышлы атҡарыу мөһим. Ә бәхет төшөнсәһе үҙ эсенә өйҙәге яҡшы мөхитте, етеш тормошто, бөгөнгө менән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереүҙе, иртәгәге көнгә ышанысты һыйҙыра. Ҡыҙғанысҡа күрә, замана ираттарының байтағы ошоно тормошҡа ашыра алмай. Шуға күрә ғаиләһенә лайыҡлы тормош тәьмин итә алмаған ир-атты ҡатын-ҡыҙ алыштырҙы: ул эшләй ҙә, балалар ҙа тәрбиәләй, йортон да һала, машина ла йөрөтә, бесәнен дә әҙерләй. Был төптә дөрөҫ түгел. Һәр кем үҙ урынында - ир-ат иңендә тормош йөгөн күтәрә алыусы, ә ҡатын-ҡыҙ улар эргәһендә гүзәллек өләшеүсе, йылылыҡ бөркөүсе, ғаилә усағына ҡуҙ өҫтәүсе булғанда ғына тормош алға барасаҡ. Ә бөгөнгө көн ысынбарлығы "өйөбөҙҙә" күҙәтелгән тәртипһеҙлектән, ҡатын-ҡыҙҙар менән ир-егеттәрҙең урындары алмашыныуының - хаостың - күрһәткесе ул.

**Фәйрүзә ИШЕМҒОЛОВА, 45 йәш, Ҡыйғы районы:** Ир-егеттәрҙе заманына ҡарап характерламаҫ инем. Һәр ваҡытта ла уңғандары янында минрәүҙәре, егәрлеләре эргәһендә ялҡауҙары, сәләмәт тормош алып барыусылар йәнәшәһендә үҙ һаулыҡтарына төкөрөп ҡараусылар, айыҡ аҡыл менән донъя көтөүселәр араһында эскеселәре булған, бар һәм буласаҡ. Ни өсөндөр тормошта малайҙарҙың ысын ир-ат булып буй еткереүе атайҙар елкәһендә, тип ҡабул ителгән. Ләкин эргәбеҙҙә донъя тотҡаһы булырҙай йәки, киреһенсә, булдыҡһыҙ ир-егеттәрҙең күберәк булыуында беҙҙең, әсәйҙәрҙең, өләшә лә ҙур. Күпселек осраҡта нәҫ әсәнең улы яҙмышына тәьҫире көслө була. Хатта көләш алып, айырым тормош көтә башлағанда ла әсәһенең йоғонтоһонан айырыла алмайынса ғүмер итеүселәр күп. Кешенең холоҡ-һыҙаттары ғаиләлә тәрбиәләнә, ә тәүге орлоҡ әсәй һөтө менән тапшырыла. Хәҙер яңғыҙ әсәйҙәрҙең күп булыуы үҙен һиҙҙерә. Атай тәрбиәһенән мәхрүм малайҙарҙың характерында ҡатын-ҡыҙ һыҙаттары асыҡ сағыла. Быны әлегә оло мәсьәлә итеп күрмәһәк тә, алдағы быуындар яҙмышында асыҡ сағылып, насар роль уйнаясаҡ, тип хафаланам.

**Лилиә УСМАНОВА, 25 йәш, Бөрйән районы:** Үҙемдең йәштәштәремдән сығып һүҙ йөрөткәндә, хәҙерге заман егеттәренең үҙенсәлекле һыҙатын - үпкәселлекте билдәләп үтер инем. Уларҙың күбеһе ҡыйыуһыҙ, икеләнеүсән. Шул уҡ ваҡытта улар үҙҙәрен һәр саҡ хаҡ һәм алдынғы, тип уйлай. Тағы ла мине аптыратҡан да, борсоуға ла һалған күренеш - ниндәйҙер ҡапма-ҡаршылыҡлы һәм киҫкен хәл килеп тыуһа, ҡарар ҡабул итеү бурысын эшлекләрәк һәм тынысыраҡ ҡатын-ҡыҙға тапшырыу йыйын ҡараусы егеттәр артты. Ғөмүмән, тиҙ һәм дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү - тиҫтерҙәремдең күбеһе өсөн хәл ителмәҫлек мәсьәлә. Шулай ҙа йәштәр араһында уңышҡа өлгәшеүсе эшҡыуарҙарҙың арта барыуын иҫәпкә алғанда, был ваҡытлыса күренеш, тип уйлайым. Йәштәрҙе ҙурайып, тормош тәжрибәһе артҡан һайын, донъяуи мәсьәләләрҙе йырып сығыу уларға еңелерәк буласағына ышанам. Олораҡ быуын ағайҙарҙы мин йомоғораҡ, үҙ хис-тойғоларын, уй-фекерҙәрен әйтеп бармаған ҡорораҡ кешеләр итеп күрәм. Ә йәштәр иһә - хислерәктәр. Шулай ҙа күпселек йәштәр тойғоларына зиһендәрен томаларға юл ҡуймай, уларҙың икеһе лә бизмәндә тигеҙ тарта.

Һаулыҡ - ҙур байлыҡ икәнлеген йәш егеттәр нығыраҡ аңлай, минеңсә. Мәҫәлән, атайымдың, бабайҙарымдың һаулыҡтарын нығытыу маҡсатында ниндәйҙер витаминдар эсеп, төнәтмәләр файҙаланыуын, һыуыҡ үткәреп, дауаханала йөрөүҙәрен бер ҙә хәтерләмәйем. Ә дуҫтарым, йәш хеҙмәттәштәрем араһында тән температуралары 37 градус булһа, "үлергә" әҙерләнеп бөтөүселәр күп. Шулай уҡ улар аптеканан витаминдар алып эсәләр, ашамлыҡтарҙы файҙалы-файҙаһыҙға бүләләр, улға ныҡ иғтибар бирәләр.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# ИР - КЕЛӘТ, ҠАТЫН - ЙОҘАҠ

Хәҙистәрҙә һөйләнеүенсә, бер зыялының ҡыҙы кейәүгә килен булып төшер көндө әсәһенән өгөт-нәсихәттәр ала: "Һөйөклө ҡыҙым! Һиңә бирер кәңәштәремде күңелеңә бикләп лә, күрәгә еткәс, еренә еткереп башҡар. Минең әйткәндәремде үтәһәң, иреңә менән гүзәл бер шәкелдә шатлыҡ менән тулы ғүмер кисерерһегеҙ, бәхетле һәм бәхтиәр булырһығыҙ", - ти әсә. Әсә биргән ун нәсихәт араһында: "Ирендең мал-мөлкәтенә һаҡсыл бул. Уның малы - һинең малың. Ирендең байлығын урынлы ҡуллан, исраф итмә. Был да - һөнәр һәм ҡәҙер күрһәтә белеү" , - тигәне лә бар.

Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре араһында ла быға ауаздаш аҡыл етерлек. Мәҫәлән: "Ир - келәт, ҡатын -йоҙаҡ" тигәне тураһында фекер йөрөтөп ҡарайыҡ. Хоҙай Тәғәлә ир-егетте мал табыусы, ғаиләһе келәтен кәрәкле ризыҡ-ниғмәттәр менән тултырыусы итеп яратҡан. Динебеҙ ҙә ир-егетте малтабар итеп нарыҡлай. Ләкин ошо хәстәрләү юлында йөрөгән ир-егеттең ғаилә тылы ла ышаныслы ҡулдарҙа булырға тейеш бит. Ә тыл, иң беренсе сиратта, ҡатын. Ҡатын кеше хужалыҡты алып барыусы, ғаилә эсендәге бар мәшәҡәттәрҙе атҡарыусы, бала тәрбиәләүсе. Әгәр ҙә ул ошо вазифаны еренә еткереп атҡара икән, тимәк, келәттең йоҙағына әйләнә.

Быуа шулай ябай ғына аңлап була был мәҡәлде. Әммә ундағы талапты үтәүҙең ир-егеттән бигерәк, ҡатын-ҡыҙ өсөн ниндәй тырышлыҡ, ныҡышмалыҡ, йыйнаҡлыҡ, хатта аң талап иткәнен күҙ алдына баҫтырып ҡарайыҡ әле. Аң, тинем, сөнки ҡатын-ҡыҙҙың келәттәге муллыҡты, етешлекте тәьмин итеү өсөн ирҙең ниндәй көс һалғанын да, уның именлеген тәьмин итеүсе үҙенең өсләтә яуаплылығын да тәрәндән аңлауы фарыҙ бит. Ошо аңлау булмаһа, йоҙаҡ була алмаясаҡ ҡатын-ҡыҙ. Әйткәндәй, өсләтә яуаплылыҡ, тигәнгә лә раҫлау бар башҡортта: "Ир өйҙөң бер сатын тотор, ҡатын өйҙөң өс сатын тотор".

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

**✓ Балыҡсы ырыуы башҡорттары ирәктеләргә ҡәрҙәш була, улар кеүек ҡара табындарҙан айырылып сыға. Шул уҡ ваҡытта балыҡсылар компонентында ҡатайҙарҙың ҡатнашлығы ла бар.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...

## тамырҙарын иҫкә төшөрһөн

**Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**




### Ирәкте шәжәрәһендә балыҡсылар

Раил Кузеевтың "балыҡсы" этимологияһын "калала (йә ҡала ситендә) йәшәгән кеше" тип аңлатыу гипотезаһының да хаҡ тип иҫәпләнеүгә хоҡуғы барлығын танып, шул уҡ ваҡытта уның етешһеҙлектәре лә бар икәнен әйтеп китке килә. Беренсенән, ҡалала йәшәгән кешене "балыҡсы" термины менән атау төрки халыҡтарҙа һүҙҙәрҙең аффиксация юлы менән тәҙәлөү талаптарына яуап бирәп етмәй. Этимологияның үрҙәгесә әйтелешенә шөғөл, һөнәр, йәғни балыҡ тотоусы мәғәнәһе нығыраҡ тура килә. Шул уҡ орхон ҡомартҡыларында ҡалала йәшәгән кешеләрҙе әйтеү өсөн "balyqdaqy" тигән иксенсе термин ҡулланылған. Икенсенән, башҡорттарҙың балыҡсылар ырыуы вәкилдәре менән ҡаҙаҡтарҙың, ҡырғыҙҙарҙың, тываларҙың балыҡсылары араһында генетик бәйләнеш булыуы раҫланмаған. Уларҙың һәр береһенән айырым төркөмдәр булып барлыҡҡа килеүе лә мөмкин. Шуға күрә лә балыҡсы ырыуы тураһында әйтҡәндә, ирәкте ырыуы башҡорттары шәжәрәһендә сағылған һәм Ғәли Соҡорой менән уның улы Ғарифулла Кейеков хеҙмәттәрендә урын тапҡан фаразға өҫтөнлөк бирәбеҙ.

Билдәле суфый шәйехе, шағир һәм яҙыусы Ғәли Соҡорой (1826-1889) күп кенә шиғри һәм дини китаптарҙың, ҡара-табын ырыуының шәжәрәһен һәм тарихын яҙып ҡалдырған кеше буларак билдәле. Уның үҙе тураһында немец тикшеренеүсеһе Михаэль Кемпер "бороңғо зыялы ирәкте ырыуына ҡараған", тип яҙа. Ғәли Соҡорой үҙенең "Тәҙкират лил-ихүән үәл әхбәб" ("Ҡәрҙәштәр һәм дуҫтар өсөн нәсихәт") тигән китабында шулай ти: "Риүәйәттәргә ярашлы, беҙҙең олатайыбыҙ Майҡы бей, Сынғыҙхандың яҡын кешеләренең береһе булып, уның менән бер арбала йөрөгән. Шуға ла уға Уйшын Майҡы бей тигән ҡушамат биргәндәр... Әйтәләр, уның өсмө, әллә дүртме улы булған. Майҡы бей уларҙың һәр береһен үҙе уҡытҡан, сәйәхәттәргә, хәрби походтарға йөрөткән. Тәүгеһенең исеме Табын бей, икенсеһенеке - Байҡы бей, өсөнсөһөнөкө - Балыҡсы бей булған".

Ғарифулла Кейековтың "Тәүәрихи ә башкордиән үә әнсәби - ирәктиүиән" ("Башҡорттар тарихы һәм ирәктеләрҙең генеалогияһы") тип аталған хеҙмәтендә ирәкте ырыуы башҡорттарының шәжәрәһенең икенсе версияһы килтерелгән. "Майҡы бей Уйшиндың дүрт улы булған. Беренсеһе - Юлдаш бей, икенсеһе Аҡҡош бей, өсөнсөһө - Ҡурмаш бей, дүртенсеһе Илек бей. Илек бейҙең биш улы булған, беренсеһе- Аҡъяр бей, икенсеһе - Даҡъяр бей, өсөнсөһө - Буҙан бей, дүртенсеһе - Ябынсы бей, бишенсеһе - Алсаҡ бей. Алсаҡ бейҙең улы - Абдулхаир, Абдулхаирҙың улы -Ҡарагәзиз. Ҡарагәзиз мулланың ҡәбере Төй йылғаһы буйында урынлашҡан. Ҡарагәзизден лаҡабы Ҡара Табын булған... Ҡарагәзиз мулланың дүрт улы булған: беренсеһе - Балыҡсы бей, икенсеһе - Рәсүл, өсөнсөһө -Таймаҫ, дүртенсеһе Әхмәтшәйех, уны Ирәкте тип йөрөткәндәр. Был шәжәрә шуныһы менән иғтибарға лайыҡ, ул ирәктеләрҙең Урал аръяғында йәшәгән ҡара табындар менән бәйләнешен күрһәтә. Шулай уҡ, "Башҡорт тарихы" хеҙмәтендә Ғарифулла Кейеков Урта быуаттан билдәле "Дәфтәри-Сынғыҙнамә" хеҙмәтенән өҙөк килтерә. Унда Сынғыҙхандың сәйәси карьераһы башында теләктәшлек күрһәткән бейҙәрҙең исемдәре телгә алына. Майҡы бей хаҡында ла һүҙҙәр бар. Сынғыҙхан уға: "О, Уйшин Майҡы бей! Һинең ағасың - ҡарағас, ҡошоң - Һамрау, ораның - Салауат,тамғаң - өстеш булһын", - ти. Был хеҙмәттә шулай уҡ Майҡы бей Ирәкте, Балыҡсы, Байҡы ырыуҙарының ата-бабаһы була, тип билдәләнә.

### Ирәкте улысы. Балыҡсы ырыуы барлыҡҡа килеүҙә табын, ҡатай ырыуҙарының ҡатнашыуы

Ҡаҙан ханлығының хандары йыш ҡын Урал аръяғы Көньяҡ Урал башҡорттарын хәрби хеҙмәткә саҡырыр булған. Был бигерәк тә Сәхиб Гәрәй менән Сафа Гәрәй исемле хандар хакимлығы осоронда киң ҡолас ала. Телгә алынған кешеләр икеһе лә Ҡырым династияһы вәкилдәре булғас, уларҙың Мәскәүгә ҡаршы булған риторикалары нығ сағыла, улар Рәсәйгә ҡаршы сәйәсәт алып бараҙар, шуға ла ханлыҡҡа даими рәүештә атлылар кәрәк була. Ә ханлыҡтың үҙ халҡы удмурттар, мариҙар, сыуаштарға бындай мөмкинлек булмай. Ҡаҙанды һаҡлауға саҡырылған башҡорттар тарихи Башҡортостандың көнбайышына күсә. Уларға Ыҡ буйында ерҙәр бирелә. Шуға күрә лә, Ыҡ буйы улыстарының барлыҡҡа килеүе башлыса XVI быуаттың 30-сы йылдарына тура килә. XVIII быуатҡа тиклем унда Ҡыпсаҡ, Тамьян, Бөрйән, Ҡатай, шул иҫәптән Ирәкте улысы ла була. Ләкин унда Ғарифулла Кейеков, Ғәли Соҡорой әйткән ҡара табындар ғына түгел, башҡа ырыу вәкилдәре лә күпләп йәшәгән. Тап уның төрлә составлы булыуы ла улыстың исемен Ирәкте итеп алырға сәбәпсе булғандыр, тип фараз яһарға ҡала. Тимәк, Ирәкте ул ырыу атамаһы түгел, ә төрлө ырыу вәкилдәре йыйылған, шул уҡ ваҡытта ҡара табындар өҫтөнлөк иткән хәрби корпорация була.

Балыҡсы ырыуына килгәндә, уның да Ирәкте улысына бәйләнеше була. Балыҡсыларҙың оло быуын вәкилдәре һөйләүе буйынса, элекке ваҡытта уларҙың ата-бабалары Ыҡ йылғаһы буйындағы далаларҙа көн күрәләр. Бер риүәйәттә улар оҙаҡ ваҡыт Бәләбәй яҡтарында, ҡатай ерҙәрендә йәшәгәндәр, тип әйтелә. Һорау тыуа, иң яҡын ҡатай ерҙәре бөгөнгә Белорет һәм Балаҡатай райондары территорияһында урынлаша, ул ваҡытта ниндәй ҡатай ерҙәре хаҡында һүҙ бара һуң? Күрәһең, Ҡатай улысы хаҡында әйтелгәндер.XVI быуатта көнсығышҡа китеп, улар бөгөнгө урындарында төпләнә. Шуға ла иғтибар итергә кәрәк, ирәктеләр балыҡсыларға тиклем үк Төй йылғаһы буйында йәшәйҙәр. Ошо әйтелгәндәрҙән сығып, шуны билдәләргә була, балыҡсы ырыуы башҡорттары ирәктеләргә ҡәрҙәш була, улар кеүек ҡара табындарҙан айырылып сыға. Шул уҡ ваҡытта балыҡсылар компонентында ҡатайҙарҙың ҡатнашлығы ла бар. Шуға күрә лә, ҡара табындарҙың ошо өләшө "табын" тип аталмай, үҙенә балыҡсы атамаһын ала.

Балыҡсылар менән ҡатайҙар араһында бәйләнештәр булыуын Р. Кузеева үҙ хеҙмәттәрендә билдәләгән. Ул балыҡсыларҙың тамғаһы, ҡатайҙарҙың "балға" тамғаһына оҡшаш булыуына иғтибар итә һәм, был ике ырыуға бер үк тамға, ләкин балыҡсыларҙа ул бер аҙ үҙгәртелгән, тигән һығымтаға килә. Ул шулай уҡ Асҡын башҡорттары менән көнбайыш ҡатайҙарҙың һөйләшендә бер фонетик комплекстар ҡулланылыуын да билдәләп үтә. Ысынлап та, Тәтешле, Асҡын, Ҡариҙел райондарының этник тарихы хаҡында һөйләгәндә, уларҙың халҡы үҙҙәренең сығышы менән Урал аръяғы һәм төньяҡ-көнсығыш башҡорттары - Табын һәм Ҡатай ырыуҙары менән бәйле булыуын күрергә була. Был турала генетик тикшеренеүҙәр ҙә һөйләй.

Шулай итеп, Р.Г. Кузеев тарафынан тәҡдим ителгән схема үҙенә раҫлау таба. Уның фекере буйынса, XIII-XVI быуаттарҙа балыҡсыларҙың ата-бабалары ҡатайҙарҙың миграция тулҡыны составында Башҡортостандың төньяғына килеп төпләнә. Бында улар урындағы (балыҡсыларҙың риүәйәттәрендә мариҙар тип аталған, бәлки, сирмештәр) фин ҡәбиләләрен ассимиляциялаштыра.

XVI быуатта Башҡортостандың төньяғына ҡара табын ырыуына һәм Ирәкте кланына ҡараған башҡорттар күсенеп ултыра. Уларҙың урындағы ҡатай башҡорттары һәм сирмештәрҙән торған халыҡ менән ҡушылыуы балыҡсыларҙың формалаштырыу процесын тамамлай ҙа инде. Үкенескә ҡаршы, хеҙмәтен яҙған саҡта Р. Кузеев Ғәли Соҡорой менән Ғарифулла Кейековтың хеҙмәттәрен тулы килмәлдә ҡулланмай, шуға күрә лә балыҡсыларҙың этногенезында табын ырыуы башҡорттарының роле тураһында әйтмәй.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар)**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Ислам башҡорттарға IX-XI-се быуаттарҙа, Бөйөк Булгар иленә йыш килгән гәрәп сауҙагәрҙәре һәм миссионерҙары аша килә. XIV быуатта Ислам башҡорттар араһында киң тарала. Ул халыҡ хәтеренән элекке инаныуҙы юйып ырғыта, гәрәп һәм татар грамотаһы быға тиклем булған ҡараштарға хас булмаған сит ҡарашты индерә. Башҡорттарға ҡағылышлы күп әҙәбиәттә беҙ уларҙың донъяға элекке ҡарашы тураһында аҙ ғына мәғлүмәт табабыҙ. Шуға ҡарамаҫтан, минең туплаған материалдарым хатта XX быуат башында ла башҡорттарҙа донъяуи диндәргә ҡарамаған, үҙҙәренең культы, ҡанбабалар ҡатламы булмаған халыҡтарға хас бороңғо инаныуҙар һәм донъяға үҙенсәлекле ҡараш ҡалдыҡтары йәшәүен раҫлай.

Волга булғарҙары батшаһына Бағдад хәлифе илсеһе итеп ебәрелгән Ибн- Фаҙлан 922 йылда Башҡортостанға килеп, башҡорттар тураһында былай ти яҙа: "Уларҙың кемеһелер үҙенең 12 хакимы булыуын белдерә: ҡыш эйәһе, йәй эйәһе, ямғыр эйәһе, ел эйәһе, ағас эйәһе, кеше эйәһе, ат эйәһе, һыу эйәһе, төн эйәһе, көн эйәһе, үлем эйәһе, ер эйәһе. Ә күктәге хаким уларҙың иң ҙуры, ләкин ул башҡалар менән уларҙың ризалығы буйынса ғына берләшә һәм уларҙың һәр ҡайһыһы уның ғәмәлдәрен хуплай... Беҙ, - тип дауам итә Ибн-Фаҙлан, - бер төркөмдөң йыландарға, икенселәренең балыҡҡа, өсөнсөләренең торнаға табынғанын күрҙек. Миңә улар ҡасандыр дошман һаналған халыҡтар менән һуғыш алып барғанда башҡорттарҙы ҡыҫымға алалар һәм шул саҡта торналар ҡысҡырышып, дошмандарҙы ҡурҡытып, уларҙың үҙҙәрен ҡасырға мәжбүр итәләр. Шуға күрә башҡорттар торнаға табына һәм: "Торна - беҙҙең хаким, сөнки ул беҙҙең дошманыбыҙҙы ҡасырға мәжбүр итте", - ти".

Текстан күренеүенсә, башҡорттар тәбиғәтте йәнле итеп күҙаллап ҡына ҡалмай, ә уларҙың һәр ҡайһыһының эйәһе бар, тип иҫәпләй. Икенсе яҡтан, ергә, балыҡтарға, торнаға табыныуҙа ҡасандыр булған һәм ошо ваҡытҡа үҙенең аңһыҙ йоғалтҡан тотем ҡалдығын ҡүзалларға мөмкин.

Шул уҡ автор башҡорттарҙа фаллос культы булыуын да билдәләй. Ағастан эшләнгән фаллосты, Ибн-Фаҙлан әйтеүенсә, башҡорттар һәр саҡ муйындарына тағып йөрөгән һәм уға табынған. Улар уны берҙән-бер булдырыусы тип һанаған. Әммә был мәғлүмәт легендаларҙа ла, башҡорттарҙың дини күҙаллауҙарында ла сағылыш тапмай.

Башҡорттарҙың элекке космогоник күҙаллауҙары етерлек кимәлдә билдәле түгел. Бары тик ай менән ҡояшты улар антропоморф йән эйәһе тип иҫәпләй һәм әкиәттәрҙә ҡояш "ҡыҙыл һыу ҡыҙы" тип йөрөтөлә. Диңгеҙҙән сыҡҡанда бер нисә сажин булған аҡ сәстәре һыу өҫтөндә йөҙә, ул ҡулы менән йөндоҙҙарҙы тотоп, улар менән сәсен йыйып ҡуя. Батырҙар диңгеҙҙән сығыусы ҡыҙҙы күреп, уның һылыулығына һоҡлана һәм ул кире һыуға төшөп китергә ниәтләгәндә, уның оҙон сәсенән урап тотоп алалар һәм уның артынан һыу батшалығына төшәләр. Ҡыҙҙың атаһын ҡыҙын уларға ҡалымһыҙ ҙа бирә. Ә кейәүгә ерҙә һағына башлағас, уларға һыуҙан сыҡҡан мал-тыуар биреп, ергә ебәрә.

**✓ Беҙҙең сит илгә китеүебеҙҙең тағы бер маҡсаты - халҡыбыҙҙың данын таратыу ҙа булды бит. "Ниңә башҡорттарҙы сит яҡта белмәйҙәр?" тигән һорау мине һәр ваҡыт борсой торғайны.**



# Ситтә чемпионлыҡ тыуған ерҙә

**Уңышлы кеше булыу өсөн сит илгә юлланыу мотлаҡмы? Әллә үҙ илеңдә өлөшөңә төшкән "көмөшөңә" шөкөр итә белһәң, яҡшыраҡмы? Уңышлы булыу өсөн үҙ алдыңа ниндәй маҡсат ҡуйырға? Ул маҡсатты тиҙерәк, еңелерәк атҡарыу өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк? Ошо һәм башҡа һорауҙар һеҙҙе лә борсоһа, бөгөнгө ҡунағыбыҙ - донъяның иң көслө 10 боксеры исемлегенә ингән, кикбоксинг буйынса - донъя, бокс буйынса Нью-Йорк чемпионы, Бөтә донъя бокс берлегенең алтын билбауын, WBO NABO вакант титулын яулаусы милләттәшебеҙ, тыумышы менән Силәбе өлкәһе Арғаяш районы егете Хәбир СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ һүҙҙәренә ҡолаҡ һалығыҙ. Иҫегеҙҙәлер, юғары уҡыу йортон тамамлағас, игеҙәктәр Сабир менән Хәбир Сөләймәновтар Америкаға юллана һәм унда ныҡлап кикбоксинг, бокс менән шөғөлләнә башлай. Әйткәндәй, Америкаға барырғамы, юҡмы, тип икеләнгән саҡтарында Сөләймәновтар яҙмыштарын тәңкә ырғытыу менән һынап ҡарай. Тәңкә "барырға" тигән яғы менән ятҡас, игеҙәктәр тәүәккәлләргә була. Әммә күпмелер ваҡыттан һуң Сабир ата-әсәһенә ярҙам итеү өсөн Силәбегә ҡайта. Хәбир - Лос-Анджелес ҡалаһында ҡала һәм бар көсөн профессиональ бокс менән шөғөлләнеүгә йүнәлтә. АҠШ-та ун йыл йәшәгәндән һуң Хәбир әле Рәсәйгә ялға ҡайтты.**

**▶ Хәбир, һинең бер бокс төрө буйынса чемпион билбауың бар. Һин Америкала күнекмәләр үтәһең, шунда йәшәйһең. Һине Америкала башҡорт милли кейемендә рингка сығыусы "Дыуамал Рәсәйле" тип тә беләләр. Әйт әле: донъя боксында Хәбир Сөләймәнов йондоҙо балҡыуында Сабир менән икегеҙҙең ҡасандыр АҠШ-ҡа юлланыуығыҙ сәбәпсеме?**

- Рәсәйҙә профессиональ бокс бармы? Әңгәмәне ошо һорауҙан башлайыҡ. Миңә ҡалһа, Рәсәйҙә профессиональ бокс юҡ. Америка менән Рәсәйҙе сағыштырһаҡ, айырма ер менән күк араһы. Был айырма халыҡтың теге йәки был ваҡиғала ҡатнашыу-ҡатнашмауында ла асыҡ сағыла. Бынан ике-өс йыл элек Өфө-Аренала Денис Шафиҡов ҡатнашлығында бокс ярышы үткәйне. Һин ошо ярышҡа барҙыңмы? Бармағанһың. Донъя кимәлендә ҙур билдәлелек яулаған Денис Шафиҡов һымаҡ боксерҙың ярышы көтөлә, тигән яңылыҡ Рәсәйҙә түгел, ә Америкала ишетелһә, иманым камил, күптәр ошо сараға барырға ынтылып торор ине. Айырыуса мексикандар әүҙем был яҡтан. Мексика кешеләренең миңә: "Һинең ярышыңды ҡараясаҡбыҙ, боксҡа ярҙам итеү өсөн барасаҡбыҙ", - тигәне хәтерҙә. Ә беҙҙә, Рәсәйҙә, нисек? Берәй сара уҙасағын белеп ҡалһалар, таныштарың, дуҫтарың бушлай билет һорай, йәки шуға өмөт итә. Бик сәйер ғәҙәт түгелме ни был? Һин дуҫыңдан нимәлер һатып алғаның булдымы? Рәсәйҙә дуҫың менән алыш-биреш итеүҙе өнәмәйҙәр. "Дуҫҡа бушлай бирәм", йә "Дуҫ ни, буш бирә инде ул", тиҙәр. Был әхлаҡ ҡанундары буйынса яҡшы күренештер, бәлки, әммә цивилизация үҫешенә, иҡтисади климаттың яҡшырыуына булышлыҡ итеүсе күренеш түгел, минеңсә.

Америкала минең дуҫтарым араһында сәнғәт юлын һайлағандар бихисап. Араларында йырсылар ҙа, актерҙар ҙа бар. Уларҙы киң билдәлелек яулаған, тип әйтеп булмай, шуға улар үҙҙәренең шоуҙарына стадиондар тултырырлыҡ тамашасы йыя ла алмай әле. Әммә улар йыш ҡына бәләкәй майҙанлы залдарҙы ҡуртымға ала ла, шунда берәй кис тамаша ойоштора. Йәш кешегә ярҙам булһын, тип, сараға актерҙарҙың туғандары, дуҫтары йыйыла. Һәр кем аңлы рәүештә, йәғни йәш талантҡтың артабан үҫеүенә өлөш индерәйем, тип, билет һатып ала. Мин дә бер ҡасан да Америкалағы дуҫтарымдан нимәнелер бушҡа алғаным юҡ. Бушҡа алыу тигән төшөнсә унда бөтөнләй юҡ. Дуҫыңдан берәй әйбер алырға теләһәң:"Миңә ошо әйберҙе һат әле", - тип һорайһың. Ә Рәсәйҙә берәй сара үткәрһәң - билет, китап сығарһаң - китап һорайҙар. Үҙҙәренә генә түгел, башҡаларға ла бүләк итергә тейешһең, тип өгөтләйҙәр...

Ә һинең һорауыңа ҡыҫҡа яуап - эйе. Боксер булараҡ уңышҡа өлгәшеү өсөн Америкаға барыуыбыҙ дөрөҫ аҙым булғандыр. Әммә беҙҙең сит илгә китеүебеҙҙең тағы бер маҡсаты - халҡыбыҙҙың данын таратыу ҙа булды бит. "Ниңә башҡорттарҙы сит яҡта белмәйҙәр?" тигән һорау мине һәр ваҡыт борсой торғайны. Был ғәмде беҙгә атайыбыҙ һалды. Силәбе өлкәһендә йәшәүсе күп башҡорт ғаиләләренән айырмалы, беҙҙең ғаиләлә һәр ваҡыт әҙәби тел яңғырап торҙо. Бер мәл атайыбыҙға йомошҡа тип күршебеҙ килеп инде. Атай өйҙә юҡ - һунарҙа ине. "Атайығыҙ ҡайҙа?" - тип һорағас: "Ул һунарға китте", - тип яуап бирҙек. Күрше был һүҙҙең мәғәнәһенең айышына төшөнә алмағас, ҡабат һораны: "Ҡайҙа китте, тиһегеҙ?" Баҡтиһәң, ауылдашыбыҙ башҡортса һөйләшһә лә, күп башҡорт һүҙҙәрен русаһы менән бутап бөтөргән, һунарҙы ла ул охота тип кенә белә булып сыҡты. Ә беҙ таҙа итеп башҡорса һөйләшергә өйрәндек. Телебеҙгә ихтирам тәрбиәләп, атай беҙҙең күңелдәргә рух орлоғо һалған. Ошо рух арҡаһында беҙҙә халҡыбыҙҙы юғары күтәрергә тигән теләк барлыҡҡа килгәндер. Шуның өсөн башҡорт батыры тураһында Мел Гибсондың "Ҡыйыу йөрәк" тигән киноһы һымаҡ фильм төшөргөм килә. Шундай хыялым бар.



**▶ Әйткәндәй, китап яҙғанһың, Салауат Юлаев тураһындағы фильмға сценарий әҙерләйһең икән, тип ишеткәйнек...**

- Эйе, мин ул китапты бер йыл буйы яҙҙым. Яҙып бөттөм дә, әле Голливудта йәшәүсе, унда эшләүсе билдәле ҡаҙаҡ режиссеры Тимур Бикмәмбәтовҡа күрһәттем. Ул яҙмамды ыңғай баһаланы, фильм төшөрөрлөк ерлек, тарих, мөхәббәт тарихы барлығы тураһында белдереп, хупланы. Етешһеҙлектәрен дә күрһәтеп бирҙе: "Диалогтарыңды тағы шымартырға кәрәк әле", - тине. Фильм төшөргән саҡта авторлыҡ хоҡуғы буйынса төрлө аңлашылмаусанлыҡтар килеп сыҡмаһын өсөн уны тәүҙә китап итеп баҫтырырға кәрәклеген дә төшөндөрҙө. "Һин уны иң тәүҙә китап итеп баҫтыр. Шул саҡта, автор булараҡ, бөтөн хоҡуҡтар ҙа бары тик һинеке генә буласаҡ. Китап сыҡҡас, уны халыҡҡа еткереү буйынса эш башла", - тигән кәңәш бирҙе.

"БашгизХан"исемле ошо әҫәремдә бер башҡорт батыры тирәһендә барған ваҡиғалар һүрәтләнә. Ул- Салауат батыр түгел. Был - башҡорт батырҙарының йыйылма образын һынландырған герой. Китапта мөхәббәткә лә, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәренә лә, данлы үткәненә лә үҙәк урын бирелә. Әйткәндәй, батырҙың холҡондағы бер һыҙат үҙемдән алынған. Ниндәй һыҙат тураһында һүҙ барғанын алдан әйтеп, ҡыҙығын бөтөргөм килмәй, китап сыҡҡас, уҡығас, үҙегеҙ аңларһығыҙ. Мине Башҡортостанда йәшәүсе башҡорттарҙың аңламауы ла мөмкин, сөнки мин был китапты, тәү сиратта, Башҡортостандан ситтә йәшәүсе башҡорттар өсөн яҙҙым. Унан ары - сит милләт вәкилдәре башҡорттоң кемлеген аңлаһын өсөн барыһына ла аңлашылған телдә яҙҙым. Ни өсөн Салауат Юлаев тураһында яҙырға ҡыйыулығым етмәнеме? Сөнки мин башҡорт тарихсылары белгән тарихты бар тулылығында белеп етмәгәнмен. Әле өйрәнеү өҫтөндәмен.

Тарихсылар тураһында һүҙ сыҡҡас, тағы бер фекерем менән бүлешмәй булдыра алмайым. Тарихсылар, ысынлап та, шаҡтай ҙур эш эшләй: улар эҙләнә, факттарҙы өйрәнә, анализлай. Уларҙың тарих фәненә һалған өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Шулай ҙа улар башлаған эште аҙағынаса еткереүгә иғтибар итеп бармай, минеңсә. Ни өсөн икәнлеген хәҙер аңларһығыҙ. Тарихтың бер осоро тураһында бик шәп хеҙмәт яҙылды, китап итеп баҫтырылды, ти. Артабан был китапты ниндәй яҙмыш көтә? Әлбиттә, тәүҙә автор хеҙмәт емешенең донъя күреүе өсөн сикһеҙ ғорурлыҡ тойғоһо кисерә, таныштарына, туғандарына күрһәтә, бер-ике конференция, исем туйы үткәрә, ти. Матбуғатта берәй мәҡәлә донъя күреүе лә мөмкин. Ләкин, минең һүҙҙәр нисек кенә киҫкен яңғырамаһын, шуның менән был китаптың хәрәкәте, тимәк, халыҡҡа килтергән файҙаһы ла бөтә түгелме? Китап кәштәлә ятып туҙа. Мин нимә әйтергә теләйем? Автор китабына яңы тормош, яңы һулыш өрөргә бурыслы. Китап итеп баҫылғандан һуң - фильм кимәленә еткерелергә, артабан халыҡтың аңын үҙгәртеүсе сара кимәленә етергә тейеш ул хеҙмәт. Ул - ошо китапта яҙылғандарҙың таралыуының беренсе аҙымы ғына. Тарихсыларыбыҙ ғына түгел, бөтөн ғалимдарыбыҙ ҙа үҙ хеҙмәттәрен ошолай таратырға, үҫтерергә бурыслы. Шул саҡта ғына эш аҙағынаса еткереләсәк. Юғиһә, китап сығаралар ҙа, ҡәнәғәт төҫ менән йөрөй бирәләр. Йәштәр китап уҡымай, тиеүҙән генә хәл яҡшы яҡҡа үҙгәрмәҫ. Тәүҙә йәштәрҙең зиһененә барып етер-

***Өфөгә килеүемдең бер сәбәбе лә - кәләш эҙләү. Был мәсьәләгә килгәндә, мин күп ҡатынлылыҡ яҡлы. Әммә үҙем бер-нисә ҡатын аласаҡмын, тимәйем. Ни тиклем ҡыҙҙарыбыҙ ирһеҙ йөрөй. Улар бала тыуҙыра алмай. Ҡыҙҙарҙан: "Һеҙ күп ҡатынлыҡҡа нисек ҡарайһығыҙ?" - тип һорағаным булды. Барыһы ла бер тауыштан: "Мин иремде кем менәндер бүлешергә риза булмаҫ инем", - тип яуаплай. Минеңсә, күп ҡатынлылыҡты рөхсәт иткән илдәр ота ғына. Чечендар, мәҫәлән, күп ҡатынлылыҡты рөхсәт иткән закон ҡабул итеп, халҡының иҫәбен ике тапҡырға арттырҙы. Элегерәк улар миллион ярым булһа, хәҙер - өс миллион.***

**✓ *Минең өсөн иң мөһиме туған телемде белеү, халҡымды яратыу, мәҙәниәтебеҙҙе белеү. Минеңсә, фатирлы, яҡшы машиналы кеше генә уңышлы түгел, ә ошо кешелек ҡиммәттәрен һанлағандар - иң уңышлы кеше.***

# ЯУЛАҺАҢ ДА...

## үҙең булып йәшә

лек саралар үткәрергә кәрәк, ул саралар ярҙамында ҡыҙыҡһыныуы уянған йәштәр аҙаҡ үҙҙәре үк был китапты йотлоғоп уҡыясаҡ.

**▶ Киләһе һорауым - бокс тураһында. Һинең бөгөнгө иң төп дәғүәсең кем?**

- Кем икәнлеген белмәйем, әммә яҡын арала, марттың аҙаҡтарында, бер ярыш көтөлә. Контракт буйынса промоутерыма тағы ике ярыш үткәрергә тейешмен. Береһен марттың аҙағында планлаштырҙыҡ, береһен - июнь аҙаҡтарында. Әгәр ҙә китапты сығарып өлгөрһәм, әлбиттә, ярышасаҡмын. Әлегә төп бурыс - китап сығарыу. Ярыштарға әҙерләнеп, туҡталған урынымда күнекмәләр эшләргә тырышам, әммә Америкалағы көсөргәнешле һаҡлауы ауыр. Хатта мөмкин дә түгел. Ни өсөн тигәндә, зарланып әйтмәйем, мине йә тегендә, йә бында саҡыралар. Ваҡыт та, хәл дә етмәй. Аҙнаһына 2-3 тапҡыр ғына күнекмә үтергә өлгөрәм.

**▶ "Көсөргәнеш" тигәндәй, тыныслыҡ заманда йәшәйбеҙ. Теге илде лә, был илде лә бер итеп йөрөгән ғәмле кеше булараҡ, Ҡырым, Украина менән бәйле мәсьәләләрҙә Америка менән Рәсәй араһында барлыҡҡа килгән ҡаршылыҡтарға ҡарата ла үҙ фекерең барҙыр. Донъя шулай нығ тотороҡһоҙмы?**

- Ул һорауҙы миңә бөтәһе лә бирә. Ысынлап та, донъя бигерәк тыныслыҡ. Минең бынан дүрт йыл элек үк Америка гражданлығына ғариза биреү хоҡуғым барлыҡҡа килгәйне. Принципиаль рәүештә был хоҡуғымды файҙаланырға ашыҡмайым, сөнки мин Американың тышҡы сәйәсәте менән ҡәтғи рәүештә риза түгелмен. Уларҙың дәүләте бөтөн ерҙә һуғыш башлап, аҡса эшләй, нефть ятҡылыҡтарын баҫып ала. Мин Американың шул ҡылығын - энергия ятҡылыҡтары өсөн дәүләттәрҙе, тарихи ҡомартҡыларҙы емереүен аңламайым. Ә халҡына килгәндә, халҡы бик яҡшы. Ун йыл буйы улар менән тығыҙ аралашыу осоронда миңә бер америкалы ла ауыр һүҙ әйтмәне. Кеше күңеленә ҡаты бәрелеү, урлашыу, алдашыу кеүек төшөнсәләр уларға бөтөнләй хас түгел.

Ҡырымды алып, Рәсәй дөрөҫ эшләне, тип уйлайым. Әгәр ҙә Рәсәй Ҡырымды алмаһа, уны америкалылар алыр ҙа, ракеталарын ҡуйыр ине...

**▶ Башҡортостанда осраған ниндәй күренештәр һине борсоуға һала?**

- Башҡорттар бер-береһенә ҡарата уҫал ҡылана - мине шул борсой. Был хәл айырыуса Башҡортостанда, унан бигерәк - Өфөлә асыҡ сағыла. Ниңә улай икән? Аңлай алмайым. Бынан дүрт йыл элек Өфөгә килгәнемдә бер ойошмаға барғайным. Был хәлде ишетеп ҡалып, икенсе ойошма вәкилдәре "Ниңә беҙгә килмәнең? Ниңә уларға барҙың?" тип, бәлә һала башламаһынмы! Минең иҫем китте. Башҡорт икенсе башҡортҡа аяҡ сала, тигән хәлде элек күҙ алдыма ла килтерә алмаҫ инем... Башҡорттар ниңә шулай бер-береһе менән бигерәк насар мөғәмәлә итә икән, тигән һорау борсой. Элеккесә, берҙәмлек төп ҡәлғәбеҙ булырға тейеш. Сөнки башҡорттар Башҡортостанда ғына йәшәмәй - улар Силәбе, Ырымбур, Ҡурған, Свердловск, Пермь өлкәләрендә лә күп. Башҡортостанда миллион ярым башҡорт йәшәһә, республиканан ситтә тағы миллиондан ашыу башҡорт йәшәй бит, уларҙы ла онотоpға ярамай.

**▶ Һине хәҙер Башҡортостанда белмәгән кеше юҡ, тиһәк, арттырыу булмаҫ. Берәй ҙур ярышыңды Башҡортостанда үткәрергә ниәтең юҡмы?**

- Һәйбәт булыр ине лә бит, ләкин ул эште атҡарыу өсөн бик күп аҡса талап ителә. Ҙурҙур бизнесмендарға: "Әйҙәгеҙ, ошо эште ойошторайыҡ әле", - тигән тәҡдим менән мөрәжәғәт иткәнем булды. Әлегә улар аныҡ ҡына яуап биргәне юҡ.

**▶ Америкала халыҡтың дингә ҡарашы нисек? Улар диндармы?**

- Эйе, Америка халҡы нығ динле. Мексикандар ҙа бик динле. Һәр йәкшәмбе улар ғибәҙәтханаға бара. Был хәл һәр аҙна ҡабатлана. Иртән сыҡһаң, матур итеп кейенеп, ғибәҙәтханаға китеп барғандары күренә. Ваҡыт төшкә ауышһа, ғибәҙәтхананан ҡайтып барғандарын күрәһең.

**▶ Американлылар илһөйәрме?**

- Эйе, улар нығ илһөйәр. Әммә илдәренә ҡурҡыныс янаһа, Америка халҡы берләшмәҫтер, моғайын. Улар: "Мин бит һалым түләйем, илде әрме һаҡлаһын, әйҙә", - тип әйтәсәк. Ә беҙҙең ватандаштар илде һаҡлауға икенсерәк ҡарашта. Америкалыларҙың аҡсаға, байлыҡҡа мөнәсәбәте бөтөнләй икенсе. Унда һәр кеше үҙ аҡсаһын пакетлы акцияға һала. Был пакетта алтыны ла, көмөшө лә, платинаһы ла, төрлө илдәрҙең аҡсаһы ла бар. Йәғни, аҡсаны юғалтыу ҡурҡынысы аҙая. Аҡсаны пакетлы акцияға һалыу граждандарға ҡапыл байыҡыу мөмкинлеге бирмәһә лә, әкренләп матди хәлен яҡшыртырға ярҙам итә. Унан һуң, Америкала аҡса һәр ваҡыт әйләнештә йөрөй. Унда аҡсаны аҡса "эшләй". Шуға АҠШ-та бөтә кеше лә аҡсаны мулыраҡ тотона һәм мулыраҡ эшләй ала... Ләкин тормошҡа мөнәсәбәт тә, аҡсаға мөнәсәбәт тә менталитеттан килә. Беҙҙең ил халҡы, бигерәк тә беҙҙең башҡорттар башҡа ҡиммәттәрҙе нығыраҡ баһалай. Әгәр ҙә улар өсөн дә аҡса беренсе урында торһа, моғайын, уға эйә булыу юлдарын табырҙар ине...

**▶ Сит ерҙәрҙә йәшәп, ниндәй ғибрәт, һабаҡ алдың?**

- Һәр кем үҙ ерендә, тыуған ерендә йәшәргә тейеш. Миңә күпмелер ваҡыт илебеҙҙең баш ҡалаһы Мәскәүҙә лә, Бөйөк Британияла ла, Америкала ла йәшәргә тура килде. Хәҙер килеп, минең күңелем Уралыма тартыла. Силәбеләме, Өфөләме - иң мөһиме, башҡорттар янында йәшәргә тейешмен. Тағы бер фәһем алдым. Ул ниҙән ғибәрәтме? Кешемен тигән кеше күктән ярҙам көтөп, ҡул ҡаушырып ултырырға тейеш түгел. Ҡайһы саҡ шундай кешеләрҙе күрергә тура килһә, сараһыҙҙан: "Көтмәгеҙ, һорамағыҙ! Үҙегеҙ эшләй башлағыҙ", - тигән оран һалғы килә. Тағы. Һайлауҙар үтһә, таныштарымдан: "Кем өсөн тауыш бирҙең?" - тип һораһам, күптәр: "Мин һайлауға барманым. Минең генә тауышым хәл иткес роль уйнамаясаҡ бит", - ти. Һүлпән кешеләрҙе енем һөймәй.

**▶ Шәхси тормошоң тураһында ла һорамай булдыра алмайбыҙ. Белеүебеҙсә, һин әлегә өйләнмәгәнһең. Ҡасан өйләнергә ниәт итәһең?**

- Был һорауҙы ла күптәр бирә. Кемдәрҙер хатта телевидениела реалити-шоу форматында кастинг үткәрергә лә тәҡдим итте. Ул тәҡдимде кире ҡағырға тура килде. "Мин шоумен түгел. Үҙемде ниндәйҙер йондоҙ итеп күрһәткем килмәй", - тип яуап бирҙем. Әлбиттә, берәй башҡорт ҡыҙына өйләнергә уйлайым. Өфөгә килеүемдең бер сәбәбе лә - кәләш эҙләү. Был мәсьәләгә килгәндә, мин күп ҡатынлылыҡ яҡлы. Әммә үҙем бер-нисә ҡатын аласаҡмын, тимәйем. Ни тиклем ҡыҙҙарыбыҙ ирһеҙ йөрөй. Улар бала тыуҙыра алмай. Ҡыҙҙарҙан: "Һеҙ күп ҡатынлыҡҡа нисек ҡарайһығыҙ?" - тип һорағаным булды. Барыһы ла бер таушытан: "Мин иремде кем менәндер бүлешергә риза булмаҫ инем", - тип яуаплай. Минеңсә, күп ҡатынлыҡты рөхсәт иткән илдәр ота ғына. Чечендар, мәҫәлән, күп ҡатынлылыҡты рөхсәт иткән закон ҡабул итеп, халҡының иҫәбен ике тапҡырға арттырҙы. Элегерәк улар миллион ярым булһа, хәҙер - өс миллион.

**▶ Чемпион булыр өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк?**

- Спорттың теләһә ҡайһы төрөнән чемпион булыр өсөн бер генә сифатың да етә. Көслө теләгең булһын. Ул теләк һине алға әйҙәйәсәк. Беҙ ҙә ошо теләгебеҙ ярҙамында Америкаға сығып киттек бит. Миңә: "Минең дә чемпион булғым килә. Ярҙам ит әле", - тип, йыш мөрәжәғәт итәләр. Ундайҙарға үҙебеҙҙең Америкаға сығып китеүебеҙ тарихын һөйләп бирәм. Беҙ "Барайыҡмы, бармайыҡмы", тип, икеләнеп торғанда, яҙмышыбыҙҙы бер тәңкә ярҙамында хәл иттек. Чемпионлыҡ серҙәре тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте "БашгизХан" исемле китабымдан таба алырһығыҙ.

**▶ Ә уңышлы кеше кем ул һиненсә?**

- Кешенең уңышлы булыуы - уның асылына, кешелек ҡиммәттәренә бәйле. Әлбиттә, һәр кем үҙен уңышлы кеше, тип һанай ала. Үҙемдең кешелек ҡиммәттәремдән сығып, мин дә үҙемде уңышлылар рәтенә ҡуям. Минең өсөн иң мөһиме нимә? Беренсенән, туған телемде белеү, икенсенән, туғандарымды, халҡымды яратыу, өсөнсөнән, милли мәҙәниәтебеҙҙе белеү. Минеңсә, фатирлы, яҡшы машиналы кеше генә уңышлы түгел, ә ошо һанап кителгән кешелек ҡиммәттәрен һанлағандар - иң уңышлы кеше.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Булмышынан ихласлыҡ бөркөлөп торған Хәбир менән аралашыу һеҙгә лә ял минуттары бүләк иткәндер, тигән өмөттә бөгөнгө әңгәмәне йомғаҡлайбыҙ. Был әңгәмәне уҡығас, берәй йәш замандашыбыҙ Хәбир Сөләймәнов һүрәтләгән уңышлы кеше сүрәтенә инергә ҡарар итте икән, тимәк, ижади коллективыбыҙҙың маҡсаты үтәлә башланы, тигән һүҙ. Әйткәндәй, Хәбир Сөләймәнов 23 февралдә көндөҙгө 12.00 сәғәттә Өфөнөң "Простор" кинотеатрында (Сипайлово бисҭәһе) "БашгизХан"исемле йыйынтығының презентацияһын үткәрә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*



# ИР ӨЙЛӘНМӘЙ ТӘҮФИҠ ТАПМАЙ

**Шулай ти башҡорт халыҡ мәҡәле. Ирҙәрҙең өйләнмәйенсә тороп аҡылға ултырмауы, яуаплылыҡ йөкмәргә ашыҡмауы - бер мәсьәлә әле. Уларҙың буйҙаҡлығында күрелә бөгөнгө йәмғиәтебеҙҙең, бигерәк тә ауылдарыбыҙҙың бәләһе: балалар тыумай, балалар тыумағас, мәктәптәр ябыла, мәктәптәр ябылғас, ауылдарҙа тормош һүнә...**

Ҡайһы ғына районға, ниндәй генә ауылға барма - ошо бер үк зар-хәбәр: беҙҙең ауылда 30-40 өйләнмәгән егет бар! Улар ни менән шөғөлләнә һуң? Ҡыҙыҡһынабыҙ. Шундай мәғлүмәт еткерәләр: араларынан бер-икеһе үҙенең эшен асҡан, уны яйға һалырға, күберәк аҡса эшләргә ынтыла - өйләнеү иртәгәгә ҡалдырыла килә. Ҡайһылары Себерҙә нефтсе шөғөлөндә - бер ай эшләй ҙә, ауылға ҡайтып, бер ай "типтерә" - шулай уҡ өйләнеү ҡайғыһы юҡ. Күберәктәр ауылдағы осраҡлы эштәрҙә мәшғүл, ҡалымда, тамаҡ һәм эске хаҡына өмәләрҙә, батраклыҡта йөрөй. Былары инде ата-әсә елкәһендә көн күрә, кемдәрелер бөтөнләй ғаиләһенең баш бәләһенә әүерелгән - өйләнеү тигән уй уларҙың башына инеп сығамы икән, билдәһеҙ...

Буйҙаҡлыҡтың тағы бер яман эҙемтәһе - өйләнмәй йөрөгән егеттәрҙең күңел бушлығын "йәшел йылан" биләүе. Шуның ҡотҡоһонда ир-егет алкоголдән башҡа бер ниҙе лә танымаған, белмәгән бер мәхлүк йәнгә әйләнә. Ә мәхлүк йәнгә яуызлыҡ йә енәйәт ҡылыу бер ни тормай. Төрлө һәләкәттәрҙең - юл фажиғәләренең, янғындың сәбәпсеһе лә улар...

"Аллаһы Тәғәлә өсөн өйләнгән кеше уҡыған ике рәҡәғәт намаҙ өйләнмәгән кешенең ғүмер буйы төндәрен намаҙ уҡып, көндәрен ураҙа тотоп үткәреүенән яҡшыраҡ", тиелә хәҙистәрҙә буйҙаҡлыҡтың кире яҡтарына ишаралап. Буйҙаҡлыҡ артынан килгән бөгөнгө заман бәләләрен алдан күҙаллаһа, нисегерәк баһалар ине икән Бәйғәмбәребеҙ был гонаһтарҙы?..

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, буйҙаҡлыҡтың эҙемтәләре бөгөн берәүҙе лә борсомай. Ғөмүмән, йәмғиәт тарафынан ситкә тибәрелгән, әҙәмгә һаналмаған төркөм ул буйҙаҡтар. Ил өҫтөндә йәмғеһе күпме буйҙаҡ бар, улар арҡаһында иҡтисадҡа, демографияға күпме зыян килтерелә - был тура ла ниндәйҙер статистик мәғлүмәттәр ҙә алып барылмай. Ошо эштең мөһимлеген, ошо бәләнең масштабын йәмғиәткә аңлатыр өсөн ни эшләргә икән, тип баш ватыла бына...

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**

*✓ Тормош шулай гел көйлө һәм тигеҙ генә барһа икән! Үкенескә күрә, уның көтөлмәгән боролоштары, хәтәр һикәлтәләре һағалап ҡына тора.*









* * *

Совхоз директоры ҡайҙандыр ситтән килгән Нестеренко фамилиялы украин кешеһе ине. Элекке колхоздар урынына совхоздар ойоштора башлағас, уларҙың етәкселәрен тәғәйенләп ҡуйыу тулыһынса райкомдар ҡулына күсте. Күпселек осраҡта совхоз директорҙарын икенсе яҡтан килтереп ҡуйыу үҙенсә бер йолаға әүерелеп киткәйне. Ғәҙәттә, ул икенсе милләт кешеһе була. Быныһы үҙенең ҡул аҫтындағыларға һәм урындағы халыҡҡа ҡарата аяу белмәһен өсөндөр инде.

Тормошта һәр ҡағиҙәнең сығармаһы була. Шуның шикелле, Нестеренко ҡанһыҙ уҡ кеше түгел ине. Әлбиттә, етәксе булараҡ ҡатҡыл, ҡул аҫтындағыларға ҡарата талапсан. Әммә Хоҙай Тәғәлә уға эш артында тере кешеләр торғанлығын күреү һәләтен биргәйне. Нәҡ шул кеше йәнлелеге арҡаһында ул, халыҡ контроле комитеты рәйесе менән һөйләшеп, эште прокуратураға алып барып еткермәү сараһын күрҙе, совхоз милкенә ҡул һуҙыусыға ҡарата урында ҡаты яза бирергә вәғәҙә итте.

Фәлсәфәүи күҙлектән ҡарағанда, Нестеренконың "ҡаты яза" тигәнен ташҡа үлсәйем тип атап булыр ине. Ул Ишбулатты үҙенә саҡыртып, оялтыу ҡатыш битәрләү телмәре тотоп алғандан һуң, башын баҫып шымтайып ултырған ғәйеплегә ошондай хөкөм сығарҙы:

- Мин һине эшеңдән ҡыуырға мәжбүрмен. Шау-шыу баҫылғансы, берәй ерҙә йөрөп торорһоң. Аҙаҡтан күҙ күрер...

Совхоз директоры был эште ошолай ғына үткәреп ебәрергә уйлағайны. Ихтимал, ул Ишбулатты яңынан ултыртыр ине машинаһына. Һәр хәлдә Нестеренконың "аҙаҡтан күҙ күрер" тигәне шуға ишара ине булһа кәрәк. Әммә халыҡ контроле комитеты рәйесенең был тәңгәлдә үҙ фекере бар ине. Ул, Нестеренко менән асылда ризалашһа ла, башҡаларға ғибрәт булһын өсөн, урып-йыйыу барышында район күләмендә ҡылынған мутлыҡтар тураһында урындағы гәзиттә мәҡәлә баҫтырып сығарҙы. "Дәүләт милкенә ымһыныусылар" тип аталған ул мәҡәләләге өс-дүрт кеше араһында Ишбулаттың да фамилияһы бар ине.

Уларҙың ауылды ғына түгел, хатта республиканы ташлап китеүенә тап шул мәҡәлә сәбәпсе булды. Үҙенең эштән ҡыуылыуына ла, бүлексәлә төрлө эш тәҡдим итеүҙәренә лә күнеп, уларҙы ғәҙел яза рәүешендә ҡабул итергә әҙерләнгән Ишбулат совхозға ғына түгел, бөтә районға рисуай булыу ғәрлеген күтәрә алманы. Бер нисә көн хурлыҡтан ҡара янып, уйланып йөрөгәндән һуң, ул эш эҙләп, күрше Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл районына сығып китте. Сәфәргә юлланғанда болотло көндө хәтерләткән Ишбулат ике тәүлектән ҡояш кеүек балҡып ҡайтып инде.

- Эш беште! - тине ул, ишектән инер-инмәҫтән. - Муйын булһа, ҡамыт табылмай торғаны бармы? Күсеп китәбеҙ! Ҡайҙа ла бер ҡояш...

Шулай итеп, йәш ғаилә Ҡыҙыл районындағы Богдановск совхозының үҙәк усадьбаһынан алыҫ түгел урынлашҡан Гусевка ауылында йәшәй башланы. Ул совхоздың икенсе бүлексәһе ине. Халҡы ҡатнаш - сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү кампанияһы барышында яңы ойошторолған хужалыҡҡа илдең төрлө төбәгенән йыйылғандар. Халыҡ әйтмешләй, ҡырҡ ата балаһы. Күбеһен урыҫтар тәшкил иткән совхозда комсомол путевкаһы буйынса килеп төпләнгән украиндар, белорустар ҙа йәшәй. Мосолман халыҡтарынан ҡаҙаҡтар бар, башҡорттар ҙа байтаҡ ҡына.

Төп йүнәлеше игенселек булған хужалыҡта механизаторҙар етешмәй ине. Шуға күрә, Ишбулатты барыу менән өр-яңы тракторға ултырттылар, бер нисә ғаиләгә иҫәпләнгән бараҡтан фатир бирҙеләр. Ҡайҙа ла бер ҡояш тиһә лә, ул бында башҡасараҡ булып сыҡты. Дөрөҫөрәге, ҡояш шул уҡ, әммә уның нуры икенсерәк ине. Сағыштырыу өсөн әйтелгән был кинәйәгә бәйле мөғжизәләр йәш ғаилә Гусевкала төпләнгәс тә башланды. Иң тәүҙә, Ишбулат менән Ғәйшәне ғәжәпләндереп, бүлексәләге ферманан уларға бушлай бер һыйыр малы бирҙеләр. Ул йәш ғаиләләрҙе ҡыҙыҡтырып, яңы совхозға эшсе көстәрҙе йәлеп итеү өсөн булдырылған йола, имеш. Баҡтиһәң, был аптырауҙың башы ғына икән. Аҙна-ун көн үтеүгә, уларҙың ҡураһы эргәһенә өлкән кәбәндәй бесән бушатып киттеләр, тағы бер нисә көндән ҡышҡа етерлек утын алып килеп ауҙарҙылар. Был хәстәрлектәр ҙә совхоз хеҙмәтсәндәре хөкүмәт эшенән албырғамаһын, шәхси хужалыҡтарындағы мәшәҡәттәре менән баш ҡатырмаһын өсөн күрелә икән.

Шулай ҙа, Ишбулат менән Ғәйшәнең иҫтәре киткән күренеш - бында ҡош-ҡорт еменә иркенлек булды. Уны хөрриәт тип атап була, сөнки ҡаҙ, өйрәк аҫраған, тауыҡ көткән һәр ғаиләнең өй алдына иген ташыған машиналарҙан асыҡтан-асыҡ бойҙай бушатып китәләр икән. Һәр кемде тигеҙ ҡарағас, бер-береһен ошаҡлау ҙа, уғрылыҡ та юҡ. Әлбиттә, утын, мал һәм ҡош-ҡорт аҙығы буш түгел - улар өсөн иң кескәй баһа менән эш хаҡынан тоталар. Эшселәрҙе дәртләндереү маҡсатында, юғары хеҙмәт күрһәткестәренә өлгәшкәндәрҙең бурыстарын иҫәптән бөтөнләй юйып ташлау ҙа киң таралғайны бында. Иң ғәжәбе шул: баяғы хеҙмәтләндереү өсөн күпме генә тотһалар ҙа, бындағы эш хаҡы тыуған яҡтағы совхоздағынан күпкә юғары ине.

Гусевкала ун йылға яҡын йәшәү дәүерендә Ишбулат менән Ғәйшә, серегән бай уҡ булмаһалар ҙа, хәлле кешеләр рәтенә инделәр. Ишморатҡа биш йәш тулғас, бүлексәлә быҙау ҡараусы сифатында эш башлаған Ғәйшәнең хеҙмәт хаҡы иш янына ҡуш булып, йыйған болдары арҭҡандан-арта барҙы. Йәштәр, совхоз бүләк иткән һәүкәштең түлен ишәйтеп, ике һыйыр һауалар ине. Уларҙың береһенән тыуған башмаҡты һәр йылда ҡышҡы һуғымға ҡалдырып, икенсеһенекен көҙ көнө терелəй совхозға тапшырып торҙолар. Ул да өҫтәмә табыш сығанағы ине.

Донъяла мәңгелек бер ҡанун бар: балыҡ һыуҙың үренә, халыҡ һыйҙың түренә ынтыла. Һарҡыта әйткәндә, һәр йән эйәһе яйлынан-яйлыны көҫәй, уңайлынан-уңайлыға ымһына. Тереклектең тәбиғәтенә шулай һалынған. Кешеләрҙе генә алайыҡ. Әлеге сифат әҙәм балаларының һәммәһенә лә хас булыу сәбәпле, элек-электән ерҙәге барлыҡ талаш-тартыш менән ҡан-яу шул уңайлыҡтарға һәм өҫтөнлөктәргә эйә булыу өсөн көрәш нигеҙендә тыуған. Ҡыҫҡаһы, уңайлылыҡҡа, ләззәткә ынтылыу юлында яҡшыһынан яманы, именлегенән фажиғәһе күберәк. Быға тарихта миҫалдар бихисап. Артабан һүрәтләнәсәк ваҡиғалар ҙа быға бер дәлил.

Елкенсәк етә, юҡ бөтә тигәндәй, ул арала Ишморат Гусевкалағы башланғыс мәктәпте тамамланы. Был тирәләге урта мәктәп Богдановкала, ләкин унда уҡыр өсөн әлегә ятағы юҡ. Көн дә йөрөп уҡырға бала кеше өсөн ара байтаҡ ҡына - ун-ун ике саҡрым. Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеү зарур: белем биреү эшен камиллаштырыу совхозда әлегә хәл ителеп бөтмәгән мәсьәләләрҙең береһе ине. Шуға күрә, хужалыҡтың бүлексәләрендә йәшәгән ата-әсәләр, балаларын артабан уҡытыр өсөн, уларҙы Богдановкалағы таныш-белештәренә, туған-тыумасаларына урынлаштырырға мәжбүрҙәр.

Богдановкала ни йүнле дуҫ-иштәре, ни зат-зәүерҙәре булмаған Ишбулат менән Ғәйшә, төрлөсә уйлап ҡарағандан һуң, үҙәк усадьбаға күсергә ҡарар иттеләр. Ә ниңә форсат барҙа күсмәҫкә? Унда урта мәктәп, дауахана, бына тигән культура йорто, магазиндар һәм башҡа кәрәкле ойошмалар. Ҡыҫҡаһы, тормош шарттары бөтөнләй башҡа. Икенсенән, Ишбулаттың күптәнге ниәте - машинала эшләү. Өҫтөнлөклө яҡтарын нисек кенә маҡтама, трактор - трактор инде. Ни тиһәң дә, шофер - уның бала саҡтан хыялына йөрөп эйә булған һәм яратҡан һөнәре. Ишбулат үҙенең теләген уйынлы-ысынлы итеп бер-ике тапҡыр автогараж мөдиренә белдереп тә ҡуйғайны. Мөдир былай кире һуҡманы, кил, ҡарарбыҙ, тине, әгәр кәрәк булһа, уны автогаражға күсереү тураһында совхоз директоры менән үҙе һөйләшергә вәғәҙә итте.

Тап килһә, килә бит: йәй уртаһында Богдановканан Латвияға күсеп китергә әҙерләнгән бер ғаиләнең шәхси йорттарын һатырға йыйыныуы ишетелде. Быны яҙмыштың йылмайыуы кеүегерәк ҡабул иткән Ишбулат менән Ғәйшә, әлеге йортто һатып алып, үҙәк усадьбала йәшәй башланылар. Ишбулат бер йыл яғыулыҡ ташый торған машинала эшләне. Уның важибәтенә совхоздың бер нисә бүлексәһендәге техниканы бензин, солярка менән тәьмин итеп тороу, нефтебазанан урындағы резервуарға яғыулыҡ ташыу эштәре ҡарай ине. Икенсе йылына Ишбулатты йөк машинаһына ултырттылар. Махсус белеме менән һөнәре булмаған Ғәйшә Богдановкалағы икмәк бешереү цехына эшкә урынлашты.

Тормош шулай гел көйлө һәм тигеҙ генә барһа икән! Үкенескә күрә, уның көтөлмәгән боролоштары, хәтәр һикәлтәләре һағалап ҡына тора. Ишбулат барып юлыҡҡан бәләне упҡын тип атарға була, сөнки күк йөҙөндәй зәңгәр ике күҙ уны төпһөҙлөгө менән арбаны. Сираттағы рейс алдынан тәмәке һатып алырға аҙыҡ-түлек кибетенә барып инһә, унда һыу һөлөгөндәй һатыусы тора. Ҡашыҡҡа һалып ҡына йотмалы тиһәк, уның Хоҙай биргән һылыулығы аңлашылыр, моғайын.

Һатыусыны күргән көндән алып тынғылығын юғалтты Ишбулат. Ятһа ла, торһа ла теге күк йөҙөндәй ике упҡын-күҙ уйынан сыҡмай маҙаһыҙлай. Улар Ишбулатты көндән-көн нығыраҡ арбай, татлы хыял булып үҙҙәренә әйҙәй. Аҡылға буйһонмаған йөрәк күкрәк ситлегенә һыймай талпына, аяҡтар үҙҙәренән-үҙҙәре әлеге кибет яғына ыңғайлай.

Ишбулаттың тынғылығын ғына түгел, башын юғалтырға мәжбүр иткән һатыусының исеме Фая булып сыҡты. Ҡасаба халҡының теле менән әйтһәк - Файка. Нугайбәк ҡатыны икән. Иренән айырылғас, башы һуҡҡан яҡҡа сығып китеп, яңыраҡ Богдановкаға килеп юлыҡҡан. Утыҙ йәштәр самаһындағы Фая, ысынлап та, ғәжәп һылыу ине. Әйтерһең, даһи рәссам яҙған картинанан төшкән - ҡарап тороуға килмәгән ере юҡ. Ул урамдан үткән саҡта ҡасаба өҫтөндә тылсымлы нурҙар уйнап, ике яҡтағы йорттар ҡыуаныстан балҡып торған төҫлө ине. Ә, бәлки, ул иҫен юйыр дәрәжәлә ғашиҡ булған Ишбулатҡа ғына шулай тойолғандыр. Һәр хәлдә, иҫен юймаған кеше үҙенең ғаиләһен, улар алдындағы бурысын онотамы ла, шул йәштә үлә яҙып икенсе ҡатынға әүрәйме? Йә иһә, аңын-тоңон белмәйенсә һәләкәтле упҡынға ташланамы?

Һөйәркәһенә яҡыныраҡ булыр өсөн рабкопҡа шофер булып урынлашҡан Ишбулат менән Фаяның эҫенешеүҙәренә ярты йыллап ваҡыт уҙғас, уларҙың шипкерте бөтә ҡасабаға фаш булды. Август урталарының иҫ киткес сыуаҡ бер көнөндә Бауыржан исемле оло ғына ҡаҙаҡ Тулыбай тигән ерҙә совхоз таналарын көтөп йөрөй ине. Һалам эҫкерте янында туҡтап торған машинаны күргән шул көтөүсе, ҡыҙыҡһыныуын еңә алмайынса, ғиш-ғишрәт менән мауығышып ятҡан Ишбулат менән Фаяның өҫтәренә барып сыҡты. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ҡаҙаҡтың тештәре сағыштырмаса теүәл ине. Шуға күрә, утыҙ тештән сыҡҡан хәбәр утыҙ өйгә таралды, тип ҡурҡмайынса әйтергә була. Әйтәгүр, был көндәрҙә өр-яңы ваҡиғаны сәйнәп бөтә Богдановка тыш-быш килде. Хатта бер йор һүҙлеһе әлеге мажараға арнап шиғри көләмәс сығарҙы:

*Бери Файку,*
*Езжай на Тулыбайку,*
*Стели фуфайку…*

Аҙағы оятһыҙ һүҙҙәр менән сыбарланыу сәбәпле күп нөктә ҡуйырға тура килгән был ауыҙ-тел ижады өлгөһө һәм уның тыуыуына этәргес биргән шаҡ ҡатырғыс хәбәр Ғәйшәгә лә ишетелде. Тик ул ҡапылғара быға төшөнмәне, сөнки кеше ышанмаҫ һүҙҙе аңы ҡабул итмәне. Абау, ни һөйләйҙәр ул? Ҡалай ҡурҡыныс хәбәр! Кит, булмаҫ, моғайын, ғәйбәттер әле!..

Их, ҡана һуң, ғәйбәт кенә булһа! Ул саҡта быға тиклем һәйбәт кенә йәшәп ятҡан ир менән ҡатын араһында оло ғауға ҡупмаҫ ине, ғүмерҙә уйламаған рәнйеү ҡатыш нәфрәтле һүҙҙәр әйтелмәҫ ине. Был һүҙҙәр хурлыҡтан, ғәрлектән илаған Ғәйшәнең йөрәгенән урғылды, әсе күҙ йәштәренә мансылып Ишбулатты ҡайыҙланы:

- Оятһыҙ! Хыянат итер булғас, ниңә минең башымды ҡаңғырттың, ниңә ун биш йыл буйы йәшәнең? Майыңа сыҙай алмай башланыңмы, ҡарт сусҡа?.. Ул бисәнең ҡайһы ере минекенән артыҡ? Әллә бер ағзаһы алтын, икенсеһе көмөшмө? Уйнаш тәүҙә балдан татлы, һуңынан тиҙәктән һаҫыҡ. Шуны ла белмәйһеңме, битһеҙ?.. Хурлығы ни тора! Егет булып бөткән балаңдан оялыр инең әҙерәк!.. Хәҙер үк сығып кит, күҙемдән юғал! Йәшә шул кәнтәйең менән. Ана Файкаң, ана тора фуфайкаң - түшәп ятырға кәрәк булыр. Дүрт яғың ҡибла!..

**(Дауамы бар).**

ӘЙТЕШ

# ҺУҒЫШ ТУҠТАМАЙ ЕРҘӘ...



**"Киске Өфө" гәзите һәм "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмө ойошторған әйтеш дауам итә. Үткән аҙнала ҡатнашыусылар Көфө сәсәндең ошо фекер ебен дауам иттеләр.**

**КӨФӨ:**
Бик фәһемле һүҙҙәр әйткән
Александр Суворов:
"Һуғыш һуңғы һалдатты, ти,
Ерләгәнсе һуҙылыр..."
Беҙ беләбеҙ: миллиондар
Юғалғандар хәбәрһеҙ.
Миллиондар ҡаҙерләүһеҙ,
Миллиондар ҡәберһеҙ.
Быны аңлап, ошо Ерҙән
Ҡасҡы килә, йүгерге.
Суворовтың әйткән һүҙе
Хаҡҡа сыға түгелме?
Ысынында 45-тән һуң
Һуғыш туҡтамай Ерҙә.
Ҡалаларға бомба яуа,
Аҡтарыла ҡәберҙәр...
Нисек булыр фекерегеҙ
Һеҙҙең ошо тәңгәлдә:
Енеүҙән һуң 70 тапҡыр
Яҙ әйләнеп килгәндә?

**ЯҒЫЛСА:**
70 йыл да үтеп киткән,
Аҙ түгел, байтаҡ ғүмер.
Был ваҡытта тутығыуҙан,
Юҡҡа әйләнә тимер.
Ошо уҙған ваҡыттарҙа,
Нисә йыл тыныс булған?
Һуғышҡан Вьетнам, Корея,
Мозамбик менән Афған.
Күпме ауыл-ҡала янған,
Күпме кеше баш һалған.
Һуғыш, тымһа ла, үлмәгән,
Салғыһы һынмай ҡалған...

**АҠЫҠ:**
Һаман әле һуғыш бара
Йә тегендә, йә бында.
Майҙарына сыҙай алмай,
Әллә ниҙәр бүлешәләр
Өс көнлөк был донъяла...

**АЙЫТҠУЖА:**
Ҡорбандарҙың хаты ҡайтты:
"Һәләк булды батырҙарса".
Еңгәндәр ҡайтҡас йәшәне
Ҡол булып бахырҙарҙа.
Йыл да Еңеү билдәләнә
Туғыҙынсы май көнө.
Һыйға ҡулһыҙ сәпәкәйләп,
Аяҡһыҙҙар бейене.
Юбилейға миҙал сүкеп,
Тәңкәләй өләштеләр.
Фашистарҙы еңеүселәр
Тик шуға өлгәштеләр.
Һуңғы ваҡыт яугирҙарҙы
Ил дә иҫенә ала.
Өйһөҙҙәргә өй бирәләр,
Батырҙар бөтөп бара...

**МАНСУРА:**
Төрлө хәлдәр, ваҡиғалар
Булып тора һәр илдә.
Белеп бөтөрөп тә булмай,
Ни булған ҡайһы ерҙә.
Бик буталсыҡ заманалар,
Мин-минлек өҫтән ала.
Күпселектә ялған еңеп
Дөрөҫлөк аҫта ҡала.
Хәҙер замана икенсе шул -
Атом, химия сағы.
Аңһыҙлыҡҡа юл булмаһын,
Һуғыш сыҡмаһын тағы.
Батшаларҙың баштарына
Инмәһен һуғыш ҡотҡоһо.
Үҙ -ара аңлашыу ғына
Тыныс тормош тотҡаһы.
Йәшәйештә күп мәсьәлә
Оло булып күренә.
Дөрөҫлөк таптырған саҡта
Ярап булмай күбенә.
Тик тыныслыҡ булһын ерҙә,
Бары яйға һалыныр.
Бөгөнгө оло мәшәҡәт
Бәләкәй булып ҡалыр...

**ЙӘНҺЫЛЫУ:**
Енеүҙең Етмеш йыллығын
Дүрт күҙ менән көтәбеҙ.
Ҡаһармандарҙы барлайбыҙ,
Хәтер йомғағын һүтәбеҙ.
Һанһыҙ ҡорбан аша килде
Туғыҙынсы Май таңы.
Латвия еренә һеңгән
Атайымдың ал ҡаны.
Беҙ көтәбеҙ, ә дошмандар
Үс тота, теш ҡайрайҙар.
Ейәндәрен һөсләтәләр
Элекке полицайҙар.
Ете диңгеҙ аръяғынан
Барак донъяны болғай.
Тышы ҡараның эсе ҡара -
Башҡорт гел дөрөҫ һөйләй.
Һалҡын һуғыш асып ята
Океан арты Мосьҡаһы.
Беҙҙең Айыуға янап ҡарай
Украина сусҡаһы.
Нәжес һөртөп маташмағыҙ
Еңеүҙең алтынына.
Айға ҡарап өрһәгеҙ ҙә
Бөтмәҫ уның нуры ла.
Бысраҡ яла яҡҡан саҡта
Өндәшмәй ҡалалмайым.
Минең ҡорал - сәсән һүҙе,
Шул ҡорал менән алышам,
Риза булһын атайым.

**АЛТЫНБИКӘ:**
Ерҙә тормош башланғандан алып
Йәнәш йәшәй Яҡшы, Яманлыҡ...
Ошо көрәш бара бар донъяла
Илгә, ҡәүемдәргә таралып.
Беҙгә ҡарап уғын атҡандарҙың
Үҙ уҡтары кире әйләнер.
Яуызлыҡтары һис барып сыҡмаҫ,
Үҙҙәренең теле бәйләнер.
Көрәшебеҙ әле тамам түгел,
Ғәҙел көрәш яңы башлана.
Был көрәштә яҡшылыҡ еңәсәк,
Ғәҙелһеҙлек унда фашлана...

**МИҢЛЕКӘЙ:**
Тормош тыныс булыр ине
Һәр кем булһа иманлы.
Кеше ғүмерен ҡыя алмаҫ,
Һуғыш асмаҫ иманлы.
Һуғыш бара, ҡан ҡойола,
Иманһыҙҙар күп ерҙә.
Иманлы тормош теләйем
Һәр кешегә, һәр илгә.

**АЛМАБИКӘ:**
Суворовтың һүҙҙәрендә
Тәрән мәғәнә ята.
Гөлгә күмер инек Ер-Әсәне-
Йоҙроғон төйнәй НАТО.
Илебеҙҙе алған ҡуласаға,
Үңәсенә хәҙер үрелә.
Бер тамырҙан булған халыҡтар ҙа
Ҡан дошмандай күренә.
Булмаһын да ине хәжәт
Һалдат һаҡлауында илеңде...
Бар халыҡтар, бер туғандай,
Шат йәшәрҙәр ине Еремдә
Баш ҡалҡытмаҡ була Ер йөҙөнә
Үлмәй ҡалған фашист орлоғо...
Үҙ -үҙенә алып таҡмаҡ була
Азат итеүсенең ярлығын.
Кемдәр үлер, кемдәр тере ҡалыр,
Барыһы ла Аллаһ ҡулында...
Башлыҡтар башына изге уй һал,
Тура барһын Путин юлында.
Аллаһ үҙе беҙгә дәрес бирә,
Ул күрһәтә ҡанлы дәһшәтте.
Балаларға һөйләп аңлатығыҙ
Фашист тигән яуыз вәхшәтте.

**МАЯНҺЫЛЫУ:**
Ер шарының төрлө мөйөшөндә
Бәрелештәр бара, болалар.
Бәндәләрҙең ғүмерҙәрен ҡыйыр
Ау-ҡапҡанды кемдәр ҡоралар?
Онотҡанмы тарих, ябырылып
Һуғыштан һуң аслыҡ килгәнен,
Ас, шешенеп меңәрләгән кеше
Яман сирҙәр менән үлгәнен...
Күңел күҙе менән байҡап ҡара,
Яман көстәр ҡайҙа эткәнен,
Кемдәр көтә унда туғандарҙың
Бер-береһен тапап үткәнен...
Күпме иҫте беҙгә әсе елдәр,
Нисә тапҡыр дертләп һағайҙыҡ.
Һағаймайыҡ әле - һаҡланайыҡ,
Кәрәк беҙгә һәр саҡ абайлыҡ.

**КӨФӨ сәсән алдағы әйтешкә артабанғы әйтешкә шулай тип "ем" ташлай:**
Эх, дуҫтарым, вайымһыҙлыҡ
Тигән атҡа атландыҡ.
Әллә инде эрелэндек,
Әллә инде ваҡландыҡ?
Иң кәрәкле, тейер һүҙҙе
Әйтмәйсә ҡалдырабыҙ.
Ваҡ-төйәккә, юҡ-барға
Йәндәрҙе яндырабыҙ.
Өнһөҙ беҙҙең шағирҙар ҙа,
Телһеҙҙәр ҙур ағайҙар.
Сәйәсмәндәр бейеп йөрөй
Иблис тартҡан ҡурайға.
Уяу донъя капиталы,
Күреп беҙҙең тынғанды,-
Доллар менән тултыралар
Тыңҡыслап сумаҙанды.
Һабаҡтарын алмағанға
Тарих әйләнеп килде.
Егерменсе быуаттың беҙ
Яңы башына индек.
Бер нәмәһеҙ тағы ҡалдыҡ,
Тағы таяндыҡ ҡаҡҡа.
Ҡайһы ерҙә яңылыштыҡ,
Ҡайҙа яһаныҡ хата?
Ошо хәлдә беләгүҙә
Нисек түҙеп ятаһың?
Кемдәр килеп төҙәтер һуң
Беҙҙең ошо хатаны?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**"Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмөндә барған әйтештә ҡатнашыусылар әүҙемләшә, әммә һаман да текстарҙың ҡыҫҡалығына, ир-егеттәрҙе күберәк йәлеп итеүгә өлгәшә алмауыбыҙ ғына бер аҙ көйөндөрә. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: әйтеште кеҫә телефоны аша СМС менән дә ебәрә алаһығыҙ: +7-937-835-34-74. "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы ла һеҙҙең ҡарамаҡҡа: kiskeufa@ufacom.ru.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



## ИР БУЛҒАН ИР... егерме биштә баш булыр

**Ир булған ир - егерме биштә баш булыр, ир булмаған ир - иллелә лә йәш булыр, ти халыҡ мәҡәле. Ираттың ҡартая белмәүе хаҡында ишетеп-күргән бар ҙа ул, ә бына ысын ир-егет менән ысын булмаған ир-егет араһында айырма ниндәй һуң?**

Рус әҙәбиәте классигы А. Чеховтың: "Ысын ир ир һәм дәрәжә тигән төшөнсәләрҙән тора", - тигән һүҙҙәре бар. Шаярып әйтелгән булһа ла, уларҙа бер ни тиклем хаҡлыҡ бар, яҡты донъяларға ир булып тыуыу - ул үҙе үк ҙур дәрәжә. Был халҡыбыҙҙың йолаларында ла асыҡ сағыла: ауылдарҙа, мәҫәлән, өлкән инәйҙәр бөгөн дә өс йәшлек ир баланың да юлын ҡыймай, шул рәүешле уны тәрбиәләй һәм был бала бәләкәй сағынан ир-егет булыу - ул яуаплылыҡ икәнен тойоп үҫә. Ҡатын-ҡыҙҙан айырмалы рәүештә, Хоҙай Тәғәлә алдындағы төп бурысы ла башҡараҡтыр уның, моғайын. Ҡатын кеше өсөн ғүмерен тулыһынса иренә, балаларына бағышлап йәшәү сауап иҫәпләнһә, ир иңендә милләте, ырыуы, зат-нәҫеле, ғаиләһе өсөн яуаплылыҡ ята бит. Быны үтәү өсөн ул үҙенә һалынған ирлек сифаттарын камиллаштырырға, егерме биш йәш тирәһенә ысын шәхес булып, ғаиләһендә лә, илендә лә баш булырлыҡ дәрәжәгә етергә тейеш. Ысын ир-егет кенә ғаиләһе, Ватаны өсөн ғүмерен йәлләмәйәсәк. Ысын ир-егет кенә үҙенең ата-әсәһенә, ҡатынына яҡшы мөнәсәбәттә буласаҡ. Ысын ир-егет кенә балаларына лайыҡлы өлгө күрһәтә аласаҡ. Намыҫын, туған халҡын, илен һәм, әлбиттә, Аллаһ алдында яуап биреүҙән ҡурҡмаҫ өсөн холоҡ-ҡылығың да ирлек дәрәжәңә лайыҡлы булырға тейеш. Юҡҡамы ни, халҡыбыҙ борондан ир-егеттәрҙе эшмәкәрлегенә ҡарап төрлөсә атап йөрөткән: ир-егет, ир-ат, ир-азамат, ир-уҙаман һ.б.

Халыҡ ир-егеттең йәше үтеүгә философик күҙлектән ҡарап, "Ирҙең йәше ике илле" тиһә лә, илле йәшкә атлағас, элеккесә йәш егет булып йөрөй алмай кеше. Был осорҙа беләктәрҙән көс китһә лә, ирҙамандан аҡыл ҡеүәте китмәй, киреһенсә, ыңғай тормош тәжрибәһе менән бергә ҡушылған белем-аҡыл ысын ир-егетте тағы ла юғарыраҡ үргә күтәреп, ил ағаһы яһай. Ысын ир булмағаны иһә, һаман да йәш була алмай йөрөй бирә. "Иллегә еткәс, ирҙәр ҙә ипкә килә" тигән булһалар ҙа, ир ҡорона инә алмай йонсоған ирҙең илле йәше тулғандан ғына аҡылға ултырып киткәнен илдең күргәне юҡ әле. Әйткәндәй, ирҙең йәше ике илле тигәнде дауам итеп, был мәҡәлдең аҙағына күҙ һалайыҡ: "уның беренсеһе - шәкәр, икенсеһе - бикәр". Йәғни, ҡеүәт ташып торғанда тәүге илле йыл шәкәр булып тойолһа, икенсеһе бикәр - бушҡа, заяға үтә, ти бит әле. Бәлки, ысын булмаған ирҙәр ысын булған ирҙәрҙең ҡәҙере нығыраҡ беленһен өсөн кәрәктер, тигән һорау ҙа тыуа. Һин был турала нимә уйлайһың, хөрмәтле уҡыусы?

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

✓ Немец фашистарының донъяға килтергән бәлә-ҡазаларын, ҡайғы-хәсрәттәрен бер кем дә, бер ҡасан да иҫенән сығармаһын ине. Утлы йылдар шаһиты булған апаларымдың хаттары, уларҙың фажиғәле яҙмыштары быға асыҡ дәлил.



ИНТЕРНЕТТАН



# ЭШКӘ ЙӘЙӘҮ КИЛ... яҡшыраҡ эшләрһең

■ Кембридж университеты ғалимдары билдәләүенсә, ҡояш нуры етешмәгән кешелә йөрәк һәм яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килеү хәүефе арта. D витамины етешмәһә, һөйәктәр муртҡа әйләнә, диабет, йөрәк сирҙәре, яман шеш аҙа. Көнө буйы ябыҡ бинала ултырып эшләүселәрҙең һәр унынсыһы хәүеф аҫтында, ти ғалимдар. D витамины күп кенә химик реакцияларҙа ҡатнаша. Был витаминдың төп сығанағы - ҡояш нурҙары. Йәйен ҡояш аҫтында 20 минут йөрөү ҙә етә, әммә ҡышын организмды D витамины менән тулылындырыу өсөн туҡланыуға ла иғтибар арттырығыҙ. Балыҡтың майлы сорттарын ашау файҙалы. D витамины тулыһынса үҙләштерелһен өсөн кальций кәрәк, шуға ла һөт аҙыҡтары ла өҫтәлегеҙҙә гел булһын.

■ Бөйөк Британия ғалимдары йәйәү йөрөүҙең психик торошҡа яҡшы тәьҫир итеүен асыҡлаған. 18 мең кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, эш урынына йәйәү, йә булмаһа, велосипедта килеүселәр физик йәһәттән генә түгел, психик яҡтан да үҙен яҡшыраҡ тоя. Улары үҙҙәрен тыныс тота, стресҡа бирешеп бармай, эшкә һәләттәре лә юғары һәм, иң мөһиме, үҙҙәрен күпкә бәхетлерәк тоя! Шәхси автомобиль менән йәмәғәт транспорты араһында ла айырма бар икән. Уларҙың икенсеһендә йөрөү файҙалыраҡ, ти ғалимдар. Сөнки руль артында кеше көсөргәнеш кисерергә мәжбүр, ә йәмәғәт транспортында бер нәмә тураһында уйламай ғына китап уҡып йәки һөйләшеп барырға була.

■ Вена университеты ғалимдары ҡыҙыҡлы тәжрибә үткәргән. Улар 42 студент ҡыҙҙы фотоға төшөрөп, тауышын яҙмаға яҙҙырған. Был материалдарҙы ир-егеттәр төркөмө ҡарап, иң матур тауышлы һәм иң сибәр ҡыҙҙы билдәләргә тейеш булған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, матур тауыш башлыса сибәр ҡыҙҙарҙыҡы булып сыҡҡан. Баҡтиһәң, тауыштың матурлығы тауыш ярыларының дөрөҫ урынлашыуы, танау менән иркен тын ала белеү, тамаҡтың тәбиғи формаларының дөрөҫ булыуы менән бәйле. Был билдәләр йөҙҙөң симметрияһы тураһында һөйләй. Шулай уҡ матур тауышлы ҡатын-ҡыҙҙар, ғәҙәттә, ҡалын иренле, уларҙың бит һөйәге юғары урынлашҡан була. Былар барыһы ла генетик аппарат эшмәкәрлегенең яҡшы эшләүен күрһәтеп тора. Шуға ла ир-егеттәр инстинктив рәүештә бындай ҡатын-ҡыҙҙарҙы сибәр тип иҫәпләй.

■ Клиник психолог Рамани Дурвасула әйтеүенсә, ҡәһүәнең ниндәй төрөнә өҫтөнлөк биреүенә ҡарап, кешенең холҡон билдәләргә була. Мәҫәлән, классик ҡәһүә яратыусылар үтә дөрөҫ йәшәүсе, талапсан булып ҡыланыусылар рәтенән. Улар киҫкен, түҙемһеҙ була, үҙгәрештәрҙе яратмай. Латтеға өҫтөнлөк биргәндәр ярҙамсыл иҫәпләнә. Ниндәй һорау менән мөрәжәғәт итһәң дә, уларҙан гел ярҙам көтә алаһығыҙ. Әммә был кешеләрҙең юҡҡа көйөп барыу кеүек сифаты ла бар. Артыҡ талапсандар капучино ярата. Улар хис-тойғоға бай, бар нәмәне контролдә тоторға тырыша, үҙҙәренең сәләмәтлеген дә яҡшы һаҡлай. Ирей торған ҡәһүә еңел холоҡ, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе аҙаҡҡа ҡалдырырға яратыусы кеше тураһында һөйләй. Ә һалҡын татлы ҡәһүәне социаль яҡтан ҡыйыуҙар эсә. Улар, ғәҙәттә, күп нәмәне уйламайынса хәл итә.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# УТЛЫ ЙЫЛДАР ШАҺИТЫ - хаттар эҙенән



**Әбйәлил районының Байым ауылында Исламовтарҙың хәҙер 16-сы быуыны ошо ергә тоғролоҡ һаҡлай. Йыуашбайҙар (туңауыҙҙар) араһынан сыҡҡан Фәхрислам Ғилмитдин улынан (1825-1897йй.) "Исламов" тигән фамилия вариҫтарына күсә килә. Фәхрисламдың өс улы - Хәйретдин, Шәрәфетдин һәм Әһелетдин дә ошо фамилияға тап төшөрмәй. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, Хәйретдиндең бер бөртөк кенә улы Ҡасимдың граждандар һуғышында йәшләй генә һәләк булыуы уның быуын сылбырын өҙә. Ә ҡустылары - Шәрәфетдиндән - Низам, Ғилмитдин, Кираметдин һәм Абдулла, Әһелетдиндән Нуритдин һәм Лоҡман атлы малайҙар донъяға килә.**

Граждандар һуғышы тамамланыу осоронда донъяға килгән игеҙәктәр Ғилмитдин менән Кираметдин бер тамсы һыу кеүек оҡшаған була. Ғилмитдин сабыр холоҡло, етди, һәр эште төптән уйлап, нигеҙле итеп башҡарһа, Кираметдин шаянлығы, шуҡлығы менән айырылып тора. Ул замандағы малайҙарҙың күптәре ҡыҙылармеец, командир булырға хыяллана.

1929 йылда уларҙың ағаһы Низам Байымда партия ячейкаһы төҙөп, коммунистар менән колхоз ойоштороу эшен йәнләндереп ебәрә. Ауылдағы тәүге "Таш өйөк" тип аталған колхозға 7 ғаилә инә. Улар араһында аталары Шәрәфетдин менән ағалары Әһелетдин дә була. Урындағы байҙар ауыл тирәһендәге һөрөнтө ерҙәрен бирмәй. Етмәһә, тәүге колхозсыларға төрлө баҫымдар яһап, ғүмерҙәрен ҡыйыу менән янайҙар. Шуға ла колхозсылар ауылдан алты саҡрым алыҫлыҡтағы Арҡа яланына күсеп китергә мәжбүр була. Мәктәпкә уҡырға төшөргә йөрөгән Ғилмитдин менән Кираметдинға белем алыуҙы кисектереп торорға тура килә, сөнки күсенеп килгән ерҙәрендә мәктәп булмай. 1930 йылдың ҡышында Өфөгә уҡырға ебәрелгән Низам ағалары кулактар тарафынан үлтерелә. Сталиндың "Правда" гәзитендәге колхоз эшен йәнләндереүгә арналған мәҡәләһенән һуң, кулактарҙың эшмәкәрлегенә сик ҡуйыла. Колхозсылар Байымға ҡайта. 1931 йылдың 1 сентябрендә игеҙәктәр беренсе класҡа уҡырға бара ала. 1939 йылда Исламовтар 7 класс белеме тураһында таныҡлыҡ алалар. Кираметдин колхозға эшкә төшә. Ә Ғилмитдин Магнитогорск ҡалаһына рабфакка юллана. Уны шул уҡ йылда Ҡыҙыл Армия сафына саҡыралар.

Ғилмитдин хәрби бурысын үтәү өсөн Алыҫ Көнсығышҡа оҙатыла. Адресынан күренеүенсә, тәүге дислокация урыны: Хабаровск крайы, Еврей автономиялы өлкәһенең Амурҙағы Ленинск ҡалаһында урынлашҡан 145-се гаубица-артиллерия полкы. 1939-1941 йылдарҙағы хаттарында күберәк ауыл тормошо менән ҡыҙыҡһыныу, бәләкәй тыуған илен һағыныуы асыҡ сағыла.

Ә Кираметдин Ҡыҙыл армия сафына Бөйөк Ватан һуғышы башланырҙан алда, 1941 йылдың майында саҡырыла. Ата-әсәһенә ни бары бер генә хат ебәреп өлгөрә. Адресынан күренеүенсә, ул хеҙмәтен Белоруссия ССР-ы, Белосток өлкәһе, Бельк ҡалаһында башлай. Хәрби бурысын үтәү урынына барғас яҙған хаты 7 июнь 1941 йыл менән билдәләнгән. Өсмөйөшлө хаттың артында Асҡар почтаһының штампы "18. 6. 41." тип билдәләнгән, йәғни ата-әсәһе хатты һуғыш башланырҙан 2-3 көн алда ғына алған. Башҡаса йыл аҙағына тиклем унан хәбәр булмай, Яңы йыл алдынан ғына "Һеҙҙең улығыҙ хәбәрһеҙ юғалды" тигән хат килә. Ғилмитдин игеҙәге яҙмышы хаҡында 1942 йылдың февралендә лә хәбәрҙәр булмай әле. Был осорҙа Нуритдин ағаһы ла һуғышта хәбәрһеҙ юғалған була.

1942 йылдың 4 ғинуарында Ғ. Исламов: "Полковой школаға уҡырға ебәрҙеләр. Уҡыу ауыр түгел, бөтәһе лә яҡшы таныш. 3 айҙан командир орудия булып сығырға тейешмен. Западҡа ебәрә башланылар. Беҙҙе шунда әҙерләйҙәр", - тип яҙа. Ғилмитдин офицерлыҡҡа Ворошилов (хәҙерге Уссурийск) ҡалаһында уҡый. Уҡып бөткәс, күрәһең, уны элекке полкында, Ҡытай сиге буйында урынлашҡан Амурҙағы Ленинск ҡалаһында ҡалдырғандарҙыр, сөнки 1942 йылдың 7 сентябрендә яҙған хатын окоптан ҡәләм менән түгел, ә сағыу төҫлө күк ҡара менән матур итеп яҙған: "Землянкала хәҙер өс йыл инде, ерҙе ҡаҙабыҙ ҙа, башын ябып, тәҙрә, ишеген яйлап эшләйбеҙ. Шулай итеп көн үтеп китеп бара. Донъялар имен булһа, ҡайтылыр. Әгәр ҙә бында торорға тура килһә. Бәлки, фронтҡа ебәрерҙәр, билгеһеҙ..."

Совет хөкүмәте япон самурайҙарының көнсығыштан СССР-ға һөжүм итмәүен аңлағас, бында торған һалдат-офицерҙар күпләп көнбайыш фронтҡа алына. Унда ҡалған ғәскәр яңы набор менән тулыландырыла. Ошо осорҙа Алыҫ Көнсығыштан яҙылған хаттарҙы ҡулға алып, тормош шарттары насарая барыуын тойомлайһың. Ғилмитдиндың хаттары хәҙер дәфтәр битенә түгел, ә брошюра, телеграмма бланкыларына яҙылған. Асыҡтан-асыҡ яҙмаһа ла, аҙыҡ-түлектең наҡыҫ булыуын да һиҙемләргә була: "...Ашау яғы насарайҙы. Беҙ аңлайбыҙ - военный обстановка. Кеше армияла күп, ауылда ирҙәр китеп бөткән, ә уларға ашарға кәрәк. Илгә ҡыйын, иген үҙе үҫмәй бит, нишләйһең, түҙергә кәрәк", - тип яҙа.

Ғ. Исламовтың Ҡытай сигенән яҙған һуңғы хаты 1943 йылдың 29 ноябре менән билдәләнгән. Артабан килгән хаттары барыһы ла тигәндәй ҡәләм менән яҙылған. Күптәре һарғайып, юйылып бөткән. Шуға күрә апамдың ҡасан көнбайыш фронтҡа ебәрелеүен, ниндәй йүнәлештәрҙә немец фашистарына ҡаршы һуғышыуын төплө генә аныҡлап булмай.

Һуңғы хаты 1944 йылдың 6 июленә ҡарай. Хаттың тик аҙаҡҡы бите генә һаҡланған. Почеркына, ручка, ҡара менән яҙылыуына ҡарағанда, окоптан яҙылған ашыҡ-бошоҡ хатҡа һис тә оҡшамай. Эҫтәлеген иғтибар менән уҡыһаң, Ғилмитдин Исламов үҙенең һуңғы хатын яҙғанын һиҙемләгәндер кеүек тойолоп китә. Хат һеңлеләре Закира менән Маһираға төбәп яҙылып, васыят һымаҡ яңғырай: "Һеҙгә ауырлыҡтарға ҡарамай, уҡырға кәрәк. 7 класс белем менән генә сикләнмәгеҙ, 10, хатта 15 класс бөтөрөгөҙ. Бына миңә 24 йәш, артабан уҡымағаныма үкенәм хәҙер. Шулай ҙа һуғыштан һуң булһа ла уҡырға теләк бар... Закира туған, һин Кираметдинды эҙләп, Москваға хат яҙҙым тигәнһең... Ул тере булһа, табылыр, үлмәгән бит, без вести пропал ғына... Өсөнсө ай һеҙҙән хат юҡ ине, яҙып тороғоҙ. Ярай хуш. Сәләм менән Ғилмитдин. 5 июль, 1944 йыл", - тип тамамлана.

"Хәтер" китабында Исламов Ғилмитдин Шәрәфетдин улының 1944 йылдың 27 июлендә Румынияның Хочений ауылы эргәһендә һәләк булыуы тураһында мәғлүмәт килтерелә. Исламов Кираметдин Шәрәфетдин улы, 1941 йылдың декабрендә хәбәрһеҙ юғалды тиһәләр ҙә, 1946 йылда Украинанан Исламов Шәрәфетдин исеменә яҙылған хат килеп төшә. Адресы дөрөҫ булыуға ҡарамаҫтан, конверттың тышындағы почерктың таныш кешенекенә оҡшамауы, кире адрестың күрһәтелмәүе һағайта. Сәйер хатты асҡас, эсенән Кираметдиндың үҙ ҡулдары менән яҙылған сәләмен алып, йәнә аптырауға ҡалалар. Юҡ, яҡындары хәбәрһеҙ юғалһа ла, үлгәндер инде, тип, төңөлмәйҙәр, әле шул өмөттәренең аҡланыуына ышанмай, хатты ашығып уҡырға тотона. Кираметдин нисек һуғыш башланыуын, заставаһы менән ҡамауға ҡалыуын, аҙаҡ пленға эләгеүен аңлатып яҙа. Пленда Украина территорияһында булыуын һәм бер крәҫтиән хужалығында эшләүен, хәҙер совет ғәскәрҙәре яҡынлашып килгәс, немецтар әсирҙәрҙе көнбайышҡа табан алып китәсәктәрен бәйән итә. "Иҫән булһам, ҡайтырмын",- тип өмөтләнә. Хатын эшләп йөрөгән хужаһына биреп ҡалдырасағын, аҙаҡ уның ата-әсәһенә ебәрәсәгенә аңлатма бирә. 1943 йылда яҙғанын да күрһәтә. Хат аҙағында икенсе почерк менән русса: "Спасибо Вам, Вы вырастили трудолюбивого, благородного, честного человека", - тип өҫтәлгән яҙыу ҙа була.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Абдулла апаның әйтеүенсә, бер яҡын туғандары, Кираметдинды юллайым, тип, ошо хатты алып, аҙаҡ юғалта. Кираметдиндың үҙенән дә башҡаса хәбәр булмай. Бер әсә ҡарынынан, бер көндә донъяға килгән ике игеҙ йәндең ғүмерҙәре, йәшлектәренең иң сағыу сағында ҡәһәрле һуғыш арҡаһында тыуған илдәрен дошмандарҙан ҡурсалап өҙөлә...

Апаларым хаттары буйынса эҙләнеүҙәремдең осона сыҡҡас, бөгөнгө туғандарымды барлап, үҙем өсөн асыш яһаным: һуғыштан һуң 4 кенә "Исламов" фамилияһын йөрөткән ир-ат ҡалһа, бөгөн, Аллаға шөкөр, улар 27 кешегә еткән! Эх, Мәликә һәм Мәфтуха өләсәйҙәрем ҡыуаныр ине, тип, бала саҡта ишеткән әсенеүҙәрен яңынан күңелем аша үткәрҙем.

**Ошо мәҡәләмә нөктә ҡуйыр саҡта телевидение экранында төрлө ил сәйәсмәндәренең Бөйөк Ватан һуғышына ҡарата фекерҙәрен белгерткән бер тапшырыу ҡараным. Ул сәйәсмәндәр араһында тарихты боҙоп күрһәтергә теләүселәрен дә күреп йәнем әсене. Улар ошо яҡты донъяла йәшәүҙәре өсөн Бөйөк Ватан һуғышында иң ҡәҙерле ғүмерҙәрен биргән яугирҙарға бурыслы икәндәрен аңламайҙармы икән? Күптән "фашизм" тигән һүҙҙең асылына төшөнөргә ваҡыттыр. Немец фашистарының донъяға килтергән бәлә-ҡазаларын, ҡайғы-хәсрәттәрен бер кем дә, бер ҡасан да иҫенән сығармаһын ине. Утлы йылдар шаһиты булған апаларымдың хаттары, уларҙың фажиғәле яҙмыштары быға асыҡ дәлил.**

**Илдар ИСЛАМОВ.**
**Әбйәлил районы.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Беҙҙең көндәрҙә ысын ир-ат булыу - үҙеңде һәр саҡ тонуста тотоу тигәнде аңлата. Даими рәүештә медицина тикшереүе үтеп, сәләмәтлегеңде профилактик саралар менән нығытып торғанда, быға өлгәшеүе ауыр ҙа түгел. Әммә шуны оноторға ярамай - ир-атҡа ла медицина тикшереүе тыуғандан алып үткәрелә һәм ул үҫеш үҙенсәлектәрен һәм ауырыуҙарҙы иртә асыҡларға ярҙам итә, хатта тәҡдиреңә бирелгән тип һаналған яман шеш, туберкулез, ҡан һәм бөйөр сирҙәрен дә дауаларға мөмкинлек бирә.**



# ТАБИПҠА КҮРЕНЕР ӨСӨН...

## сәбәп кәрәкмәй

Сабый ваҡытта кешенең нервылар системаһы үҫешенә һәм йәш буйынса нормаларға тап килеүенә иғтибар бирелә. Тыуыу менән һәр бала АПГАР шкалаһы буйынса нулдән алып 9 балға тиклем баһалана. Был һан ни тиклем юғарыраҡ, шул тиклем яҡшыраҡ.

Имсәк балаларҙың енес системаһын ентекле тикшереү мөһим. Күкәйҙәр тән эсендә, ҡорһаҡта үҫешә һәм һуңынан тоҡсаға төшә. Ҡайһы берҙә был процесс яйлай йәки бөтөнләй туҡталып ҡала. Мәҫәлән, тоҡсала бары тик бер генә күкәй йәки ул буш булыу осраҡтары ла күҙәтелеүе мөмкин. Был осраҡта балалар хирургы йәки балалар урологының консультацияһы мотлаҡ!

Ҡорһаҡта, юғары температурала булғанда, күкәй дөрөҫ эшләмәй. Тап шул сәбәпле малайҙарҙы йылы итеп урау, "парник эффекты" булмаһын өсөн подгузник кейҙереү ярамай.

Малайҙарҙың тормошондағы "ауыр осорҙар"ҙа - ярты йәштә, 1,3, 5, 7, 15 һәм 16 йәштәрҙә - табип күҙәтеүе бигерәк тә мөһим. Тап шул осорҙа мөһим ағзаларҙың һәм системаларҙың үҫеүе йәки өлгөрөүе бара. Шуға ла был процестың күҙәтеү аҫтында булыуы яҡшы. Үҫештәге үҙенсәлекте ваҡытында күреп, ваҡытында төҙәтеү еңелерәк. Мәҫәлән, тештең ҡыйыш йәки салыш үҫеүен ваҡытында төҙәтергә мөмкин, әгәр инде һуҙып йөрөгәндә, уны операцияға алып барып еткерергә лә була. Йөрәктәге проблеманы асыҡлау, ҡайһы ваҡытта "еңел" режим билдәләп кенә лә уның ауыр ауырыуға әйләнеүенә юҡ ҡуймаҫҡа була.

Мәктәпкә барыу алдынан күҙҙәргә етди иғтибар бирелә һәм уларҙың көсөргәнешкә әҙерлеге тикшерелә. Улығыҙҙы "очкарик" итеп күргегеҙ килмәһә, окулистың әйткәндәрен теүәл үтәргә кәрәк. Әгәр нәҫелегеҙҙә насар күреүселәр булһа, табипҡа алдараҡ мөрәжәғәт итеү яҡшыраҡ. Хәҙер күреү һәләтен яҡшыртыусы һөҙөмтәле ысулдар бар. Уларҙың тап балаларға тәьҫире көслө.

12-14 йәштә медицина тикшереүҙәрендә үҫмерҙәрҙең йөрәгенә һәм енес ағзаларына ныҡ иғтибар бирелә. Сөнки йөрәк организмдың үҫешенән артта ҡалыуы ихтимал. Был осраҡта еңелсә күнекмә режимы, күпмелер ваҡытҡа тормош рәүешен үҙгәртеү зарур. Үҙ йәше өсөн талап ителгән нормаға еткәс, малай ҡабат ғәҙәти тормош алып бара аласаҡ.

Шулай уҡ енси ағзаларҙың һәм икенсел енси сифаттарҙың үҫешенә лә иғтибар итеү кәрәк. Был ваҡытта малайҙарҙа төктәр барлыҡҡа килә, күкрәк биҙҙәре ҡата, тауыш үҙгәрә, айырым тән өлөштәренең пропорционаллеге юғала. Былар барыһы ла - норма. Ошо норманан тайпылыш эндокринологта тикшерелеүгә нигеҙ булып тора. Медицина тикшереүендә буй-һын торошон дөрөҫләү өсөн ортопедтың ярҙамын һәм консультацияһын, дауалау физкультураһын, массаж тәғәйенләүҙәре лә мөмкин.

15-16 йәштә үҫмерҙәр хәрби хеҙмәткә әҙерлек буйынса бер нисә тапҡыр тикшереүҙәр үтә. Уларҙың организмы тулыһынса формалашып бөтә, әммә буйға үҫеү дауам итә. Был ваҡытта өлгөргәнлеккә һәм хроник ауырыуҙар булыу-булмауға ентекле тикшереү уҙғарыла.

Артабан инде дәүләттең күпселек ир-ат һаулығына ентекле иғтибары оҙаҡҡа кәмей. Бары тик зарарлы производствола эшләүселәргә генә даими медицина тикшереүҙәре үткәрелә. Медиктар, һатыусылар һәм башҡа медицина кенәгәһенә эйә һөнәр кешеләре бары тик инфекция таратыу хәүефенә генә тикшерелә. Һәр ир-аттың даими юлдашы булып ни бары флюорография ғына ҡала. Ул ваҡытында үпкә туберкулезын йәки үпкә рагын асыҡларға ярҙам итә. Күптәр нурланғыһы килмәгәнлектән йәки күпләп бушлай тикшереүгә ышанмайынса, компьютер томографияһы ярҙамында дөйөм тикшереү үтеүҙе өҫтөн күрә. Был дөрөҫ түгел. Ябай ғына флюорография үпкә яман шешен беренсе стадияла уҡ асыҡларға ярҙам итә. Бындай шеш үҙен һиҙҙертмәй, әммә ваҡытында асыҡлап, унан хирургик юл менән ҡотолорға мөмкин.

45 йәштән алып ир-егет даими медицина тикшереүенә мохтаж. Ҡан баҫымын тикшереү, кардиограмма, окулиста һәм урологта тикшереү үтеү "стандарт туплама"ға (флюорография, ҡандың, бәүелдең дөйөм анализы, терапевт, хирург, ЛОР) кәрәкле өҫтәмә булып тора. Үҫешкән илдәрҙә барлыҡ ир-егетPSA (Простаты Специфический Антиген) анализына ҡан тапшыра. Ул простата биҙенең яман шешен иртә асыҡларға ярҙам итә. Рәсәйҙә был анализ мотлаҡ түгел, бары тик уролог ҡушыуы буйынса ғына эшләнә.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# ИР АҠЫЛЛЫҺЫ...

## өс йыллығын алдан уйлар

**Халҡыбыҙ аҡылы - хазина. Дөрөҫ файҙаланғанда ошо мәҡәлдәр беҙҙең өсөн бай, етеш һәм дөрөҫ йәшәүгә үҙенә күрә бер ҡулланма. Быуаттар аша беҙгә килеп еткән был хазина ҡулланғандан һис кенә лә бүҫкәрмәй, киреһенсә, ҡиммәтәйә генә бара.**

Беҙ - сағыштырмаса бәхетле быуын. Мәҡәл-әйтемдәр, кинәйәле һүҙҙәр менән генә тәрбиә биреп ултырған инәй-олатайҙар араһында үҫтек. "Ир баланың юлын ҡыймағыҙ, улар ил эше менән йөрөй", "Ир кешенән уҙып һүҙ һөйләмә", "Ир бала - терәк, ҡыҙ бала - биҙәк", тип тылҡып ҡына тора инеләр. Ирмәк тойолған һүҙҙәрҙе үҫмер саҡта бик үк аңлап етмәһәк тә, күңел хәтеренә инеп ятҡан бер тәрбиә булған икән ул. Бына ошондай һабаҡтар кешене ғүмер буйы оҙата килә, тот та файҙалан инде.

Үкенескә күрә, хикмәтле мәҡәлдәрҙең айышына кеше барыһы ла үҙ башынан үткәс, елкәлә татылғас ҡына төшөнә. "Ир аҡыллыһы өс йыллығын алдан уйлар, ҡатын аҡыллыһы өс көнлөгөн алдан уйлар", тигәнде тәү тапҡыр ҡайнымдан ишеттем. Уның ошо мәҡәлгә бәйләп улына: "Ғаиләңдә ҙур эш башларҙан алда килен менән кәңәшләшеп ал, сөнки ҡатын-ҡыҙ шул эшеңдә буласаҡ ваҡ-төйәк нәмәләрҙе яҡшыраҡ күрә ", - тигәненә мин нык ҡыуандым. Был теләк йәш кәләштең дә баһаһын бермә-бер күтәрҙе бит! Бөгөнгө психологтар билдәләүенсә, ир кеше фекер йөрөтөүе буйынса "стратег", ә ҡатын-ҡыҙ - "тактик". Ғаилә башлығы үҙ көсөн самалап, өс йылда өй төҙөп ултыртам, тип дәртләнә икән - был хуп күренеш. Әммә шул уҡ мәлдә уның бөгөн өҫтәлендә ятҡан икмәге нисә көнгә етәсәген белмәүе лә мөмкин. Халыҡ әйтмешләй, әҙерләнгән ризыҡты "ашаған" ир бер тоҡ он күпмегә етәсәген ысынлап та белмәй, ә "тураған" ҡатын ғаиләһе хыялланған йорт төҙөлһөн өсөн был тәңгәлдә самалауҙың нимә икәнен һәр саҡ башында тота.

**Сәриә ҒӘЛИАСЛАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Байыуҙың метафизик элементы

Метафизика - философияның ысынбарлыҡтың тәбиғәтен, аныҡлап әйткәндә, аң һәм материя араһындағы мөнәсәбәттәрҙе өйрәнеүсе бүлеге. Әйҙәгеҙ, уның нисек эшләгәнен ҡарайыҡ.

